✓ ***Бер уҡыусы уҡытыусыһының ҡысҡырып илап тороуын күреп, үҙе лә уға ҡушылып иларға тотонған. Улар оҙаҡ ваҡыт бергәләп ҡысҡырып илағандан һуң, уҡытыусы илауынан туҡтап, уҡыусыһына өндәшкән: "Һинең сәбәпһеҙгә илауың миңә бик сәйер күренә, һин бит миңә ярарға тырышып ҡына илайһың. Ә сәбәпһеҙгә илаусы кеше гонаһлы һанала. Шуға күрә бер ваҡытта ла күңел төбөңдән сыҡмаған күҙ йәштәреңде түгеп, гонаһҡа батма", - тигән уҡытыусы.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30 ИЮНЬ - 6 ИЮЛЬ (ҺӨТАЙ - МАЙАЙ)
2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№26 (496)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яҙыусыға картуф сәсергәме,**
йәки Капитализмға әҙәбиәт кәрәкме?



3

**Ҡан хәтере...**
ул дәһшәтте һаман оноттормай



5

**"Иманлы ауыл" хәрәкәтен...**
салауаттар башламаҡсы



7

**Үҙ ҡаҙаныңда ҡайнама,**
ситтәрҙе лә күреп ҡайт



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Тормошта һынауҙар аҙым һайын. Сығарылыш уҡыусылары биргән Берҙәм дәүләт имтиханын ошондай һынауҙар рәтенә индереп буламы?



*Мәүлиҙә ФӘХРИСЛАМОВА, Әбйәлил районы:* Ҡыҙым Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика интернат-гимназияһын уңышлы тамамланы. Аллаға шөкөр, Берҙәм дәүләт имтихандары ла артта ҡалды, ҡулға аттестат та алдыҡ, матур итеп сығарылыш кисәһендә күңел дә астыҡ. Хәҙер алдыбыҙҙа юғары уҡыу йортона инеү маҡсаты тора. Барыһына ла үҙемде ҡушып һөйләйем, сөнки атай-әсәй балаһы тормошо менән йәшәй бит инде. Бала шатланһа, атай-әсәй күңеле лә тыныс, бала күңеле китек икән, беҙҙең дә йөрәк болоҡһой. Мәктәп йылдарында төрлө ваҡыттар күп була, ләкин иң ауыр һынау, баҡтиһәң, балалар өсөн дә, атай-әсәйҙәр өсөн дә Берҙәм дәүләт имтиханына килеп терәлгәс башлана икән. Мәктәптең һуңғы кластарында былай ҙа бала күңелендә ҙур үҙгәрештәр бара. Улар бала саҡ менән хушлашыу һәм оло тормошҡа тәүге аҙымды яһау осорон кисерә, күңелдәренең иләҫ-миләҫ сағы. Бындай саҡта һәр ваҡиға улар тарафынан киҫкен ҡабул ителә. Шуға күрә нәҡ ошо ваҡытта айырыуса һаҡ, иғтибарлы булыу мөһим. Ә БДИ улар иңенә тағы ла бер психологик йөк булып ята һәм был осорҙа бала янында ныҡлы, ышаныслы терәк булыуы мөһим. Был йәһәттән гимназия уҡытыусылары һәм тәрбиәселәре беҙҙең балаларға оло терәк һәм ярҙамсы булды. Улар һәр балаға иғтибар бүлеп, өйрәтеп, төплө кәңәштәрен биреп, күңел йылыһын һалып имтиханға әҙерләне. Беҙ ҙә балаға ярҙам итергә, уға рухи терәк булырға тырыштыҡ. Дәүләт имтихандары ваҡыты яҡынлашҡан һайын ҡыҙымдың да үҙгәреүен тойҙоҡ. Ул тәүҙә тирә-яҡтағыларҙың БДИ-ны үтә лә ҡурҡыныс итеп һөйләүҙәрен тыңлап, интернет селтәрендәге төрлө мәғлүмәтте уҡып, һәйбәтләп ашамай башланы, ябыҡты, уйсанға әйләнде, тиҙ тоҡаныусан булып китте, иптәштәре менән аралашыуын кәметеп, көндәр буйы баш баҫып китап ҡосаҡлап ултырҙы. Ләкин беҙ уға бөтә нәмәлә лә сама булырға һәм ваҡытында ашарға ла, ял да итергә, саф һауала йөрөргә лә кәрәклеген аңлатҡас, барыһы ла яйға һалынды.

Минеңсә, БДИ бала иңенә һалынған бик оло йөк ул. Әлбиттә, уның әһәмиәтен кәметергә ярамай, әммә уның тирәһендәге ваҡиғаларҙы үтә ҡырҡыулаштырып ебәреү ҙә кәрәкмәйҙер, сөнки был балаға психологик яҡтан ныҡ тәьҫир итә. Ҡайһы бер төбәктәрҙә имтихан тирәләй хәлдәрҙе шул тиклем ҡуйырталар, бала хатта яҡты донъя менән хушлашыуға тиклем барып етә. Бындай фажиғәләр өсөн беҙ, ололар ғәйепле, сөнки үҙебеҙҙең йөрәктәге хәүефте баҫа алмайынса, төрлө хәбәрҙәр һөйләп, нығынып етмәгән бала психикаһын яралайбыҙ. БДИ ваҡытында уның иң яҡын таяныҫы һәм ярҙамсыһы - ул атаәсәһе. Шуға күрә, тәү сиратта, үҙебеҙгә тынысланырға һәм аҡыл менән эш итергә, балаға тормошта буласаҡ һынауҙар алдында был үтә лә ҡатмарлыһы түгел икәнлеген аңлатырға кәрәк.


**(Дауамы 2-се биттә).**


УЯН, УЙЛАН, КЕШЕ!

# ТОРАТАУҒА ҠАҒЫЛМАҒЫҘ!

*Аң булығыҙ! Ни яҙһаң да*
*Түҙә ҡағыҙ.*
*Торатауға, зинһар өсөн,*
*Ҡағылмағыҙ!*

*Кем таларға бирә тыуған*
*Төйәктәрен?!*
*Ҡуҙғатмағыҙ әүлиәләр*
*Һөйәктәрен!*

*Сыңғыҙхандың ҡәберен аҫҡас,*
*Һуғыш сыҡҡан,*
*Ә Торатау Еребеҙгә*
*Беҙҙең ҡалҡан.*

*Торатау бит бөкө һымаҡ -*
*Башы таҡыр.*
*Ҡуҙғатһағыҙ уны Ерҙә*
*Туфан ҡалҡыр!*

*Ҡуҙғатһағыҙ, килер Ергә*
*Ахырзаман!*
*Йә, әйтегеҙ, кемдәрегеҙ*
*Бахыр һаман?!*

*Аҡса ҡоло! Уйламаған*
*Алдағыһын...*
*Аҫаба йән шуны нисек*
*Аңламаһын!*

*Һеҙҙең өсөн оялыштан*
*Булдым көйөк...*
*Торатауға ҡағылмағыҙ,*
*Аллаһ - Бөйөк!..*

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**




**(Торатауҙа үткән сара тураһында 6-сы биттә уҡығыҙ).**

БАШ ЙОРТТА



# ӨФӨ БУЙЛАП... сәйгә сарсап

**Был рубриканы гәзитебеҙҙең үҙенә күрә бер табышы булды, тип әйтергә мөмкиндер. Ул донъя күрә башлағаны бирле баш ҡалабыҙ тормошона хас байтаҡ ҡына проблемаларҙы асып һалды. Тыуған ҡалабыҙ тағы ла күркәмерәк, унда йәшәүе һәм эшләүе тағы ла уңайлыраҡ булһын өсөн тырыша унда сығыш яһаусы авторҙарыбыҙ ҙа.**

Ошоға тиклем баҫылған мәҡәләләрҙә ҡаланың төҙөклөгә, таҙалыҡ, транспорт мәсьәләләре һәм башҡа шундай күп кенә проблемалар яҡтыртылды. Әгәр баш ҡала һәм уның райондары хакимиәттәре тарафынан ошо сығыштар күҙгә эленеп, әйтелгән тәҡдимдәр һәм матур, эшлекле фекерҙәр эш папкаһында тупланһа, өйрәнелһә һәм улар буйынса анығ саралар күрелә барһа, ҡалабыҙ тормошо әкренләп булһа ла алға табан барасаҡ. Шулай була күрһен.

Бөгөн мин ҡалала дөйөм туҡланыу мәсьәләләре хаҡында бер-ике һүҙ әйтмәксемен. Элек Өфөлә аҙым һайын ашхана, ҡабаланғанда аяғөҫтө генә булһа ла ҡапҡылап сыға торған кафетерийҙар күп ине. Ана шул кафетерийҙарҙа һәр төрлө бутерброд, сәйгә иң киткес тәмле пирожныйҙар, ҡабарып бешкән ҡайнар "пончик"тар тәҡдим итәләр ине. Шунда инеп, тәмле итеп сәй, кофе эсеп сығыуға ни бары 30 һум стипендиябыҙҙан да арттыра ала инек, сөнки хаҡтар әлегеләй ҡот осҡос түгел ине. Элекке ашханалар хәҙер "заманса", йәғни кеҫәне ҡалын булмаған ябай кешеләр, шул иҫәптән ауылдан йомош-юл менән килеүселәр урап үтерлек ресторан дәрәжәһенә еткереп биҙәлеп, аш-һыуына юғары хаҡтар ҡуйылып, нигеҙҙә, аҡсалыларҙы хеҙмәтләндереүгә ҡоролған, ә баяғы кафетерийҙарҙың эҙе лә ҡалмаған.

Уның ҡарауы, хәҙер, айырыуса йәй башланғас, аҙым һайын йәштәрҙе (шул иҫәптән - студенттарҙы ла) һыра менән һыйлаусы палаткалар, хатта тирмәләр ҡороп бөтәләр. Улар бөтә ерҙә - парктарҙа, ҡауҙа-күңел асыу комплекстары биләмәләрендә, юл буйҙарында, скверҙарҙа, йәмле Ағиҙелебеҙ буйҙарында...Теләмәһәң дә хатта барып инеп китерһең, сөнки улар һине һәр мөйөштә һағалай, музыкаһын ҡысҡыртып, әллә ҡайҙан саҡырып тора. Ләкин нисек кенә ҡыланмаһындар, шөкөр, мин ундай палатҡаға гүмеремдә инеп ултырғаным юҡ. Сарсап сәсрәһәм дә инмәм, сөнки, беренсенән, ундай урындарҙа ултырыу минең өсөн ят, яҙыҡ гәмәл булып тойола; икенсенән, быныың өсөн ваҡыт та, теләк тә юҡ. Унда ҡайҙа барып, нимәгә төртөлөргә, аҡсаһын ҡайҙа ҡуйырға белмәгәндәр инәләр, тием. Өсөнсө бер сәбәп тә бар әле: шундай үҙешмәкәр "ашхана"ларҙа сәләмәтлек өсөн хәүефле шарттарҙа әҙерләнгән шешлектәрҙе ашап, күпме кеше дауаханаға эләгә! Ошоларҙы уйлап, күпме йылдар хәҙер һөйләнгән башҡорт аш-һыу йорто, ниһайәт, асылып та, уға нишләптер "Пышка" тигән сәйер исем биреләүе, асылда иһә, унда ла хаҡтарҙың бик ҡиммәт булыуы, ә ит ризыҡтарының бөтәһенә лә сусҡа ите ҡушып әҙерләнеүе аптырата ла, эсте лә бошора... Ә уның ҡала буйынса асылған бәләкәй филиалдарына "Пышка"ның үҙәк ашханаһынан артып ҡалған иҫке ризыҡтар килтерелә. Бына йөрө инде шунан Өфө буйлап, сәйгә сарсап...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

# Тормошта һынауҙар аҙым һайын. Сығарылыш уҡыусылары биргән Берҙәм дәүләт имтиханын ошондай һынауҙар рәтенә индереп буламы?

(Башы 1-се биттә).

***Әлмира МУСИНА, Х.Дәүләткилдеев исемендәге художество интернат-гимназияһының урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Сығарылыш класс етәксеһе булараҡ, быйылғы уҡыу йылы минең өсөн айырыуса тулҡынландырғыс. Бәләкәй генә булып мәктәп ишеген асып ингән малай һәм ҡыҙҙар бына-бына үҙаллы тормош башлаясаҡ. Уларҙы алда шатлыҡлы минуттар менән бер рәттән, оло һынауҙар ҙа көтә. Ошо һынауҙар рәтенә ҡайһы берәүҙәрҙең Берҙәм дәүләт имтиханын да индерергә тырышыуы менән килешмәйем. Имтихан эштәре мәктәп программаһынан алынған, һәм уҡыған, шөғөлләнгән кеше өсөн әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай. Маҡсатлы әҙерләнгәндә, ялҡаулыҡҡа баш бирмәгәндә БДИ-ны бер ауырлыҡһыҙ атҡарып сығырға була. Беҙ, мәсәлән, балалар менән БДИ-ға ике йыл буйы әҙерләндек һәм яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәштек. Минеңсә, мәктәптәргә БДИ ысулы индереп, яҡшы эшләнеләр, сөнки бер-нисә блоктан торған мәсьәләр ярҙамында уҡыусының белемен төрлө яҡлап тикшерен була. БДИ йылдан-йыл камиллашасаҡ һәм тора-бара гәҙәти имтихан булараҡ тыныс ҡабул ителә башлаясаҡ, тип уйлайым. Ә уның тирәләй йыл да ҡуйыртылған һүҙҙәр, БДИны ҡот осҡос ваҡиға итеп күрһәтергә тырышыу, минеңсә, балалар психикаһына баҫым яһау маҡсатында махсус эшләнә, сөнки күңеле тыныс булмаған, йөрәгенә ҡурҡыу орлоғо һалынған бала белгән сүрәттә лә хата ебәрергә мөмкин. Әлбиттә, имтиханға ныҡлы әҙерлек менән барған осраҡта ла ниндәйҙер ҡаршылыҡтар килеп тыуыуы бар, ләкин бала алдан уҡ ҡаушап ҡалмаҫҡа, ситуацияға ҡарап эш итергә, тулҡынланмаҫҡа өйрәтелгән булырға тейеш. Уҡытыусы һәм ата-әсә алдында баланы ошондай экстремаль хәлдәргә әҙерләү бурысы ла тора. Дөрөҫөн әйткәндә, хәҙерге заман балалары аптырап ҡала торғандарҙан түгел. Шуға күрә, әйтеп үтеүемсә, БДИ-ға ныҡлы әҙерләнгәндә уны йырып сығып була. Киләһе йыл уҡыуҙы тамамлаясаҡ уҡыусыларға бер нәмәнән дә ҡурҡмаҫҡа, уҡырға, әҙерләнергә, ә ата-әсәләргә һәр кемдең ауыҙынан сыҡҡан һүҙгә ышанып, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫкә саҡырам. Ышаныс - ярты еңеү икәнлеген онотмағыҙ.

***Айнур БУЛӘКБАЕВ, 11 класты тамамлаусы:*** Берҙәм дәүләт имтихандарын яҡшы тапшырҙым. Тәүгеләренән етерлек балл йыйҙым, һуңғы икәүһенең дә һөҙөмтәһе яҡшы булыуына ышанам, сөнки ныҡлы әҙерләндем. Мотлаҡ бирелергә тейешле имтихандарҙан репетитор яланыҡ һәм мин улар менән йыл буйына шөғөлләндем. Һайлама имтихандарҙы ла иғтибарҙан ситтә ҡалдырманым, өҫтәмә шөғөлләндем, аңламағандарын уҡытыусынан һорАным. Шулай ҙа беренсе имтихан алдынан аҙыраҡ ҡурҡыу хисе бар ине, ләкин сисәһе мәсьәләләрҙе күргәс тә тынысландым, сөнки улар минең өсөн бер ауырлыҡ та тыуҙырманы. Ә ҡалған имтихандарға йырлап тигәндәй барҙым. Ә бына ҡайһы бер класташтарымдың имтихандарға еңел ҡарауы аптыраштa ҡалдырҙы. Беҙҙең артабанғы тормошто хәл итәсәк ваҡиғаға ошондай мөнәсәбәт күрһәткәс, тимәк, улар үҙ ғүмерҙәренә лә шундай уҡ ҡараштa, тигән фекер тыуҙы. Нимә генә тимәһендәр, БДИ мәктәпте тамамлаусылар өсөн оло һынауҙарҙың береһе. Шуға күрә был эштә битарафлыҡ күрһәтеү ауыр эҙемтәләргә килтерергә мөмкин.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгәндәр уға 17 июлгә тиклем дә яҙыла ала. Ул саҡта гәзит өйҙәрегеҙгә августан килә башлясаҡ.**



Июнда гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәреүселәргә лә бүләктәр көтә: 3 кеше - башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим" китабына, 3 кеше "400 башҡорт халыҡ йыры", 3 кеше Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", ҡалғандар иһә "Айыҡ туй сценарийҙары" китаптарына эйә буласаҡ.

● Квитанцияларығыҙ менән бергә **тыуған көндәрегеҙҙе** лә хәбәр итегеҙ. Гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атаәсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **234 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

**"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. 2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Йортонда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Чехияның Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы Илсеһе Петр Коларж етәкселегендәге Чехия Республикаһы делегацияһы менән эш осрашыуы үткәрҙе. Осрашыуҙа Чехияның Башҡортостандың иң ҙур тышҡы сауҙа партнерҙарының береһе булыуы билдәләнде. Былтыр ике республика предприятиелары араһындағы тауар әйләнеше миллиард долларҙан ашыу сумманы тәшкил иткән.

✓Чехия Республикаһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы Илсеһе Петр Коларж Өфөләге Берләштерелгән сервис-виза үҙәген рәсми асыу тантанаһында ҡатнашты. "Учреждение 25 майҙан эшләй, Шенген килешеүе буйынса эшләгән Европаның ете иленә визалар әҙерләй, әммә рәсми асыу тантанаһы булмағайны әле. Бөгөн рәсми рәүештә Чехия миссияһын асабыҙ, сөнки тап ошо йүнәлеш республика йәштәре араһында айырыуса популяр", тип аңлатты Өфөләге Берләштерелгән сервис-виза үҙәгенең етәксеһе Светлана Хәкимова.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Владимир Чуров менән осрашты. Владимир Чуров декабрь һәм марттағы федераль кампания буйынса республикаға ҡарата иҫкәрмәләр булмауын билдәләне. Ошо уҡ көндө Владимир Чуровтың БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев менән эш осрашыуы үтте. Республика парламенты башлыҡы территориаль һайлау комиссияларын төҙөгәндә барлыҡҡа килеүсе кадрҙар мәсьәләһенә иғтибар итергә саҡырҙы.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында 40-ҡа яҡын закон проекты тикшерелде, 24 закон проектына закон статусы бирелде. Улар араһында "Башҡортостан Республикаһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексына үҙгәрештәр индереү", "Башҡортостан Республикаһында торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеүгә граждан хоҡуҡтарын яҡлауҙы тәьмин итеү тураһында", "Башҡортостан Республикаһының Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге тураһындағы кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында" кеүек закон проекттары бар.

# ЯҘЫУСЫҒА КАРТУФ СӘСЕРГӘМЕ,

## йәки Капитализмға әҙәбиәт кәрәкме?

**Яңыраҡ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов етәкселегендәге бер төркөм яҙыусылар менән Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге республика милли китапханаһында осрашып һөйләште. Бындай осрашыу яҙыусылар һәм әҙәбиәт һөйөүселәр өсөн күптән көтөлгән ваҡиға ине. Сараның республика йәмәғәтселегендә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуы шул турала һөйләй. Баҡтиһән, Зыя Нуриевтан һуң республика етәксеһе булған кеше башҡорт яҙыусылары менән ошолай махсус рәүештә осрашмаған икән дә…**



1951 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Әхнәф Харисов рәйеслек дилбегәһен Мостай Кәримгә тапшырған саҡта шундай теләк һүҙҙәре әйткән: "Яҙыусыларыңдан картуф сәстермә!" Бер яҡтан ҡарағанда, картуфтың үҙе кеүек яп-ябай ҙа, икенсе яҡтан ҡараһаң, ҡапыл ғына төшөнөп етә алмаҫлыҡ теләк һүҙҙәре былар. Халыҡта картуфты икенсе икмәккә тиңләү бар барлыҡҡа, әммә бында һүҙ тик картуф хаҡында ғына бармауы ла көн кеүек асыҡ.

Был һүҙҙәрҙе бар тулылығында аңлар өсөн икмәк һәм иман хаҡындағы киң билдәле әйтемдәрҙе килтерәйек: "Хәйерселек булған урында иман булмай", "Ас хәлен туҡ белмәй", "Икмәк булһа, йыр ҙа булыр", "Ас кеше иман хаҡында түгел, икмәк хаҡында уйлай" һ.б. Был һүҙҙәргә ниндәйҙер киңәйтелгән аңлатма кәрәкмәйҙер, тием. Илебеҙҙә һәм донъяла барған үҙгәртеп ҡороуҙар, киң билдәлелек, ил иҡтисадының ҡырағай баҙар шарттарына дусар булып, тулыһынса емерелеүе, ил байлығының айырым кешеләрҙең ҡулында тупланыуы, ил йөҙ тотҡан идеологияның тарҡалыуы, һәр нәмәгә доллар аша ҡарау сәйәсәте - былар барыһы ла рухиәтебеҙҙә, уның көҙгөһө булған әҙәбиәттә, яҙыусыларҙың көнкүреш шарттарында сағылыш тапмай ҡалманы. Үҙәк телевидение аша асарбаҡ хәленә ҡалған билдәле яҙыусыларҙы, шағирҙарҙы, сәнғәт, мәҙәниәт әһелдәрен күрһәтеп торалар бит...

Яҙыусы хеҙмәте, сағыштырмаса алғанда, бик түбән баһалана хәҙер. Был хәл тик бер яҙыусыға ғына ҡағылмай, әлбиттә. Әйтәйек, яҙыусы үҙенең яңы романын өс йыл эсендә яҙҙы икән, ти. Ул роман китап булып баҫылып сыҡҡансы тағы ла ике йыл үтеп китә. Һәм шул китап өсөн, йәғни әҙиптең биш йыллыҡ интеллектуаль хеҙмәте өсөн түләнгән гонорар хаҡын үҙ ғүмерендә бер китап та уҡып ҡарамаған, юғары рухиәттең нимә икәнен дә белмәгән, әммә баҙарҙы яҡшы белгән эшҡыуар бер көндә эшләп ала. Тимәк, биш йыллыҡ интеллектуаль хеҙмәт хаҡы интеллектуаль булмаған хеҙмәттең бер көнлөгөнә тиң. Сағыштырып та булмаҫлыҡ хәл-күренеш был. Беҙ ил халҡына, уның интеллектуаль элитаһына, эшселәргә, ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәренә ҡулайлы йәшәү шарттары тыуҙырыу маҡсатында илде үҙгәртеп ҡорорға тырыштыҡ та, һөҙөмтәлә киреһенсә килеп сыҡты: былар барыһы ла айырым кешеләрҙең мәнфәғәте өсөн генә кәрәк булған икән. Мәҫәлән, совет осоронда һәр йәһәттән яҡлаулы һәм һаҡлаулы булған яҙыусыға ул заман льготаларынан бары тик вафат булғас, фотоһын ҡуйып, хөрмәтләп, аҫтына дәүләт эшмәкәрҙәренең, ижадташтарының фамилияларын теҙеп яҙып, бушлай некролог баҫтырыу ғына тороп ҡалды. Ә бит совет осоронда "Ағиҙел" журналында баҫылып сыҡҡан бер поэманың гонорарына яҙыусы тормош иптәше менән икеһенә санаторийға путевка, икеһенә лә бер ҡат өҫ кейеме һатып ала алған.

Бына шуның өсөн дә республика етәксеһе яҙыусылар менән осрашыуында юғары рухиәт тураһында һөйләшеү урынына үҙен "финанс кәңәшмәһендә" ултырғандай тойҙо ла инде. Әхнәф Харисовтың картуф хаҡындағы һүҙҙәре был осраҡта асыҡлана төшә: Яҙыусылар союзы үҙенең яҙыусыларын, һис юғы, минималь йәшәү һәм ижад шарттары менән тәьмин итергә бурыслы. Ә Яҙыусылар союзының бындай мөмкинлектәре юҡ, ул ни бары ижтимағи ойошма ғына. Республика етәксеһенең был йәһәттән алдағы киләсәктә яҙыусыларға етерлек кимәлдә финанс һәм башҡа йәһәттән (китап баҫтырыу һәм уны таратыу, Рәсәй һәм донъя уҡыусыһына сығыуҙы ойоштороу, яҙыусыларҙы ял йорттарында, санаторийҙарҙа ял иттереү, республикала ижад йорто, әҙәбиәт музейы булдырыу, тәржемә эшен яйға һалыу, Мәскәүҙә, башҡа урындарҙа әҙәбиәт белгестәрен әҙерләү мәсьәләләре) ярҙам ителәсәге тураһында белдереүе күңелде йылытты, әлбиттә.

Капитализмға әҙәбиәт кәрәкме? Юҡтыр. Ни өсөн тигәндә, капитал туплау үҙе үк күңелде, рухиәтте инҡар итә. Әгәр ҙә ул тойғоға, хискә нигеҙләнһә, капитал да була алмаҫ ине. Әгәр ҙә беҙ әҙәбиәтте, мәҙәниәтте һәм сәнғәтте халыҡ күңеленең сағылышы тип атай алабыҙ икән, капитализмға һис кәрәге булмаған рухиәттең, был осраҡта әҙәбиәттең, тик милләткә генә кәрәклегенә инанабыҙ. Ҡыҫҡаһы, әҙәбиәт капитализмға түгел, милләткә кәрәк. Ә ҡайһы осраҡта халыҡ милләткә әүерелә? Әлбиттә, үҙенең дәүләтселеген төҙөгән осраҡта. Яңынан ете йылдан беҙ рәсми рәүештә Рәсәйгә бәйле Башҡортостан дәүләтселегенең 100 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ. Бында Рәсәйгә тиклемге осорҙағы башҡорт милләтенең дәүләтселек формаларын иҫәпкә алмайбыҙ. Шулай итеп, XX быуаттың тәүге сирегендә Рәсәйҙә барған сәйәси ваҡиғалар юҫығында күтәрелеп сығып, үҙенең ғәскәрен булдырып, ҡан ҡойоп, Рәсәйҙә беренсе булып республикаһын төҙөүсе милләтебеҙ ҡаһармандары был аҙымға башҡорт милләтенең ирекле үҫеш гарантияһын дәүләтселек кимәленә күтәрер өсөн барған һәм үҙ маҡсатына өлгәшкән. Әйткәндәй, башҡорт әҙәбиәтен үҫтереү, яҙыусыларҙың ижад һәм социаль шарттарын тәьмин итеү ҙә шул дәүләтселектең бурысы итеп билдәләнгән икән, республикабыҙ бөгөн дә йәшәй икән, Рәсәй илебеҙҙә социализммы, капитализммы, ниндәй генә "изм" ҡоролошо булмаһын, милләтебеҙ үҫешенең хоҡуҡтары үҙгәрешһеҙ булырға тейештер. Кем белә, бәлки, республикабыҙҙың төп гарант ролен үтәүсе Президент менән һөйләшеү тап ошо юҫыҡта барырға тейеш булғандыр ҙа. Нимә генә тимә, баҙар шарттарында аҙ һанлы халыҡтарҙың ғына түгел, ғөмүмән, һәр бер әҙәбиәт "яҙыусы-китап-баҙар-уҡыусы" механизмы буйынса рентабелле була алмай. Гәзит-журналдар ҙа шул уҡ яҙмышлы. Бында һүҙ ысын әҙәбиәт хаҡында бара. Рухи ихтыяждың баһаһы бөтөнләй башҡа категориялар буйынса үлсәнә.

"Яҙыусылар Алланың ҡашҡа тәкәһеме, ниңә уларға айырым иғтибар?" тип әйтер ата прагматик. Әммә беҙ юғары профессионаллек талап иткән хеҙмәттең мәғлүмәт быуатында тик энтузиазмға ғына ҡалдырылыуын үҙешмәкәрлек тип кенә баһалай алабыҙ. Ә инде үҙешмәкәрлек булған урында юғары рухиәт тураһында һөйләшеү бөтөнләй мөмкин түгел. Яңыраҡ яҙыусы Гөлсирә Ғиззәтуллина телевизорҙан барған бер тапшырыуҙа: "Тәжрибәле һауынсы һөттө күп биреүсе һыйырын айырып ашата", - тигән бик ҡыҙыҡлы бер фекер әйтеп ысҡындырҙы. Хәҙерге яҙыусының хатта ана шул һыйыр урынында ла була алмауы үкенесле. Бында һүҙ "айырып ашатыу" тураһында түгел, дәүләт тарафынан минималь иғтибар тураһында бара. Яҙыусы бер үк ваҡытта милләттең уҡытыусыһы ла, табибы ла, ә уҡытыусылар менән табиптар айлыҡ эш хаҡы алып йәшәй.

Һөйләшеүҙә күтәрелмәй ҡалған тағы бер мәсьәлә: хәҙерге заман кешеһенә ниндәй әҙәби герой кәрәк һуң? Заманға яраҡлаштырып әйтһәк, дәүләт яҙыусының хеҙмәтен матди яҡтан баһалағанда, бағымсы ролен үтәгәндә, унан ниндәй әҫәрҙәр талап итә һуң? Был - айырым һөйләшеүҙе талап иткән идеология мәсьәләһе. Беҙҙең генә түгел, оло илебеҙ Рәсәйҙең дә донъяға доллар күҙлегенән ҡарауҙан тыш, ундай идеологик йүнәлеше, үҫешенең милли идеяһы билдәләнеп бөтмәгән. Президент менән осрашыуға килеүсе әҙиптәрҙең, билдәле мәҫәлдәге һымаҡ, һәр ҡайһыһы үҙ мәсьәләһен күтәреп, береһе - һауаға, береһе - һыуға, береһе ергә тартылыуы идеологик стратегияның булмауынан да киләләр. Нимә генә тимә, океан арьяғынан килгән индивидуализм йоғонтоһо яҙыусылар мөхитенә лә килеп инеп, уларҙы "үҙ фатирына" бикләгән шул.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советының Өфөлә үткән ултырышында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов ике миллионлыҡ башҡорт милләте теленең яҡлауға мохтаж булыуы хаҡында белдергәйне. Быны ул бар Рәсәйгә ишеттерерлек итеп әйтте. Ә бит әҙәбиәт иң беренсе нәүбәттә телде һаҡлаусы сара, ҡорал. Милләт күңеле, уның уй-хыялдары, милли әҙәбе туған теле аша әҙәби әҫәрҙә сағыла икән, әҙәбиәт һәр заманда ла дәүләт яҡлауына мохтаж.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ БР Үҙәк һайлау комиссияһының яңы составы ойошторолдо. Башҡортостан Президенты Указы һәм БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Ҡарары менән 12 кешенән торған БР Үҙәк һайлау комиссияһы төҙөлдө. Нәйлә Алтынова, Хәйҙәр Вәлиев, Рифғәт Гарданов, Сергей Каменев, Ришат Лоҡманов, Руслан Ямалетдинов, Рөстәм Бикмәтов, Валерий Гета, Марина Долматова, Илдар Кәримов, Альберт Хаживәлиев, Урал Хәсәнов республика Үҙәк һайлау комиссияһы ағзалары итеп тәғәйенләнде.

✔ "Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенә Һиндостан Республикаһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы Илсеһе Аджай Малхотра етәкселегендәге Һиндостан Хөкүмәте делегацияһы килде. Һиндостан - 60-сы йылдар уртаһынан "Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең стратегик партнеры. 2011 йылда Һиндостанға поставкалар өлөшө Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе экспортының дөйөм күләмендә 34,2 процентты тәшкил иткән.

✔ Өфө Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү күләме буйынса, шулай уҡ бер кешегә тура килгән хеҙмәттәр күләме буйынса Ҡаҙандан ҡала икенсе урында килә. 2012 йылда баш ҡаланың көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү предприятиеларында тауар әйләнеше 6,1 миллиард һум тәшкил итергә тейеш. 2011 йылда был күрһәткес 5,7 миллиард булған. Әлеге ваҡытта Өфөлә көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү өлкәһендә 2200-гә яҡын предприятие һәм шәхси эшҡыуар эшләй. Тармаҡта 18 меңдән ашыу кеше эш урыны тапҡан.

✔ 2012 йылға социаль турҙар маршруттары буйынса тәҡдимдәрҙе һайлап алыу буйынса эксперттар советы ултырышында пенсионерҙар һәм инвалидтар өсөн маршруттар исемлеге төҙөлдө. Программала пенсионерҙарға һәм инвалидтарға бюджет аҡсаһы иҫәбенә субсидиялар биреү ҡаралған. Ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһына хоҡуғы булған 60 йәше тулған ир-егеттәр һәм 55 йәштән үткән ҡатын-ҡыҙҙар, шулай уҡ коляскала ултырған инвалидтар, инвалид балалар һәм уларҙы оҙата барыусы яҡындары ошо программала ҡатнаша ала.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Зәки Вәлиди ниндәйҙер кимәлдә үҙенең хеҙмәттәре аша киләсәккә сигнал ебәрә һәм ул милләттәштәренә генә түгел, ә Ер шарының барлыҡ белемле кешеләренә төбәлгән.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# КҮПМЕ АРТТЫРҺАҢ ДА...

## аҡса етмәйәсәк инде

**Йәйге каникулға китер алдынан республика парламентарийҙары аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә льготалар һәм компенсациялар түләү буйынса законға байтаҡ төҙәтеүҙәр һәм үҙгәрештәр индерәсәк. Әлегә закон проектта ғына, ләкин ғәмәлгә ул 2013 йылдың 1 ғинуарынан инәсәк.**

Яңылыҡтың бер мәле бар: күп балалы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә уҡыусы балалар өсөн хәҙер транспортта, музейҙарға һәм театрҙарға бушлай йөрөү, бассейндарға абонементтар һатып алыу өсөн ай һайын 310 һум аҡса түләнәсәк. **База түләүҙәре иһә түбәндәгесә буласаҡ:**

- Яңғыҙ әсәгә - 284 һум.
- Саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәткә алынған хәрби хеҙмәткәрҙең балаһына - 213 һум.
- Алимент түләүҙән ҡасып йөрөгән ата-әсәнең балаһына - 213 һум.
- Башҡа балаларға - 142 һум.
- Әгәр ғаилә Межгорьела йәшәһә, түләүҙәр 47,82 процентҡа арта.

**Был суммаға өҫтәмә льготаларға ҡарап төрлө өҫтәмәләр ҙә бар:**

а) Бала инвалид; күп балалы ғаиләнән; яңғыҙ әсә тәрбиәһендә; хәләл ефете үлеү, ата-әсәлек хоҡуҡынан мәхрүм ителеү сәбәпле никахта тормаған яңғыҙ ата йәки әсә тәрбиәһендә; инвалид йәки эшләмәүсе пенсионерҙар ғаиләһендә булһа; ғаиләлә бер ата-әсә - 1-се төркөм инвалиды булһа; ата-әсә икеһе лә көндөҙгө бүлектә уҡып йөрөһә, 132 һум түләнә.

б) Бер йәшкә тиклемге һәр балаға (әгәр ғаиләлә дүрттән күберәк бәлиғ булмаған бала булһа - 230-ар һум) 115-әр һум түләнә.Был пункт бары тик ауыл ерендә йәшәүселәргә генә ҡағыла.

в) Һәр уҡыусы балаға 310-ар һум түләнә.

Ләкин шуны ла иҫтә тоторға кәрәк: беренсе пункт буйынса бер нисә категорияға тап килһәгеҙ ҙә, пособиелар ҡушылмай, йәғни бер пункт буйынса бер балаға 132,5 һум ғына түләнә. Икенсенән, ғаиләләге барлыҡ өлкәндәр уҡырға йәки эшләргә тейеш, эшһеҙ ятыусылар, мәшғүллек үҙәктәренә барырға теләмәүселәр булырға тейеш түгел (инвалидтар һәм уларҙы тәрбиәләүселәр, йәкле ҡатындар, иҫәпкә торған рәсми эшһеҙҙәр һәм ауылда йәшәүселәрҙән тыш).

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Шулай уҡ патронат ғаиләләр һәм тәрбиәгә бала алған ата-әсәләр өсөн дә пособиеларҙың артыуы көтөлә. Әлегә тиклем был сумма 5080 һәм 4000 булһа, яңыса иҫәпләүҙәр буйынса 5858 һәм 4900 һум буласаҡ. Был закон әле беренсе уҡыуҙан үткән, тиҙҙән артабанғы уҡыуҙарҙа ҡабул ителәсәк. Хатта ул ғәмәлгә йыл башынан ингән тип билдәләнәсәк. Йәғни бындай ғаиләләргә түләүҙәрҙе ярты йыл өсөн ҡайтанан иҫәпләйәсәктәр. Тағы шуныһы ла бар - хәҙер тәрбиәгә бала алыу шарттары ҡатмарлаштырыла. Теләге булыусылар мотлаҡ психолог-педагогик һәм хоҡуҡи әҙерлек үтергә тейеш буласаҡ.**

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# ҮТКӘНДӘРҘӘН КИЛӘСӘККӘ КҮПЕР...



## тап Өфө аша үтә кеүек

**Александр КУДЕЛИН, Рәсәй Фәндәр академияһы Президиумы ағзаһы, М. Горький исемендәге Бөтә Рәсәй Әҙәбиәт институты директоры:** Академик институттарҙың фәнни ҡеүәте бер нисә объектив критерий: фәнни мәҡәләләр һәм уларға ҡуйылған баһа, фәнни гранттарҙың һаны һ.б. буйынса баһалана. Былтыр ошондай баһа нигеҙендә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты лайыҡлы рәүештә беренсе категорияға эйә булды. Бөгөн фәндең түбәнгә тәгәрәүе тураһында күп һөйләйҙәр, әммә был институт бындай фекерҙәрҙе инҡар итә. Шәхсән минең өсөн бөгөнгө көнгә ике томы донъя күргән "Башҡорт теленең академик һүҙлеге" был фәнни коллектив өсөн оло ҡаҙаныш булып тора. Был оло яуаплылыҡ, оло көсөргәнеш талап иткән эште бары тик килер быуындарға бай мираҫ ҡалдырыу маҡсатында тиҫтәләрсә йылдар арымай-талмай эшләнгән, бер маҡсатлы ғалимдар коллективы ғына йырып сыға ала. Икенсе хеҙмәттәре - ете томлыҡ "Башҡорт халыҡ тарихы" үҙе генә лә ни тора! Хатта ошо ике хеҙмәт кенә лә Институттың ни тиклем уңышлы эшләүе тураһында һөйләй.

**Евгений ЗЕЛЕНЕВ, Санкт-Петербург дәүләт университетының Көнсығыш факультеты деканы, профессор:** Беҙҙең уҡыу йортоноң Көнсығыш факультетында Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Төркиәт тикшеренеүҙәр үҙәге дүрт йылдан ашыу уңышлы эшләп килә. Үҙәк менән бер рәттән, башҡорт халҡының данлы улына, ғалим, профессор Зәки Вәлиди Туғанға бюст та асылды. Унын 1895 йылда Александр Попов үҙенең тәүге радиосигналдарын ебәргән бинанан 10 метр самаһы алыҫлыҡта урынлашыуы ла әһәмиәтле. Сөнки Зәки Вәлиди ниндәйҙер кимәлдә үҙенең хеҙмәттәре аша киләсәккә сигнал ебәрә һәм ул милләттәштәренә генә түгел, ә Ер шарының барлыҡ белемле кешеләренә төбәлгән. Шуға ла Зәки Вәлиди бөтөн донъяла арбруй яулаған һәм билдәле төркиәтсе булып танылған.

Элек Көнсығышты өйрәнеү Көнсығышҡа ҡарамаған илдәргә аңлатыу маҡсатында барлыҡҡа килгәйне, бөгөн ул ошо тәүге билдәләнешен юғалта бара. Әгәр Лондон университетында инглиздәргә Яҡын Көнсығышты тикшереү йүнәлешендә ғәрәптәр белем бирә, ә Испанияла эш теле булып ғәрәп теле тороуы ла ихтимал икән, беҙ был фән аша кемгә нимә аңлатабыҙ? Күптән түгел минә Европаның йөрәгендә - Брюсселдә булырға тура килде һәм мин үҙемде Мысырҙың Александрияһындағылай тойҙом - аралашыу нигеҙҙә ғәрәп телендә бара. Беҙҙенсә, Көнсығышты өйрәнеү бөгөн глобаль фәнгә әүерелә бара. Унын төп маҡсаты - донъяның универсаль гуманитар Көнсығыш образын формалаштырыу. Һәм Башҡортостандың Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәренә хеҙмәттәре, ғилми эшләнеүҙәре, асыштары менән донъяға башҡорт-төрки мәҙәниәтенең рухи гәүһәрен бүләк иткән өсөн тәрән ихтирам менән рәхмәт белдереүҙән башҡа һүҙ юҡ. Хатта һеҙҙә байлыҡ кешеләрҙең бер-береһенә мөнәсәбәтендә лә сағыла. Башҡортостанда алсаҡ, тәрбиәле кешеләр йәшәй. Бер мәл хатта шундай мөнәсәбәттән күҙҙәремә йәш тулды. Кафела төшкө аш ашай инек. Беҙҙе хеҙмәтләндереүсе ҡыҙ килеп, ғәфү үтенеп, сменаһы тамамланыуын, икенсе кеше хеҙмәтләндерәсәген һәм үҙен юғалтып борсолмауыбыҙҙы һораны. Һоҡланғыс ихтирамлылыҡ! Был сәйәси, мәҙәни процестарға бәйле түгел тип уйлайым. Бары тик эш шунда: һеҙҙә ғаилә ҡиммәттәре, боронғо ҡиммәттәр ныҡ һаҡланған. Был рухи өлкәлә лә, матди өлкәлә лә сағыла. Уҙған быуаттарҙың классик бинаһары өлгөһө матур һаҡланған. Башҡорт дәүләт опера театрында, Милли музейҙа, Башҡорт дәүләт академия драма театрында булып, уларҙың бинаһарын күргәндән һуң шундай хистәр тыуа, әйтерһең дә, үткәндәрҙән киләсәккә күпер тап Өфө аша үтә.

**Марианна ҺАРУНОВА, Тыва гуманитар тикшеренеүҙәр институты хеҙмәткәре:** Мин Өфөлә беренсе тапҡыр түгелмен, сөнки тормош иптәшем Башҡортостандан, Иглин районының Түбәнге Ләмәҙ ауылынан. Шуға мин Башҡортостанға һәр саҡ теләп киләм. Ә бына ғилми бәйләнештәр буйынса тәүгә килеүем. Шуға күрә Башҡортостанды, Өфөнө яҡынан астым, тиергә мөмкин. Әлбиттә, Өфө ғилми үҙәгендәге коллегаларымдың ҡайһы берҙәре менән ситтән тороп таныш инек, ҡайһы берҙәре Тывала үткән конференцияла ҡатнашҡайны. Бөгөн иһә улар менән осрашырға, яңы бәйләнештәр булдырырға, Тыва-Башҡортостан институттарының ғилми мөнәсәбәттәрен артабан да нығытырға тағы бер мөмкинлек сыҡты.

Был килгәнемдә башҡорт телмәрен, башҡорт милли мәҙәниәте, теле, тарихы тураһында күп ишетергә тура килгәндәй тойолдо. Был ысынлап та шулай булдымы, әллә мин үҙемдән, шулай булһын ине, тигән хыялымды, теләгемде ысынбарлыҡ итеп ҡабул иттемме икән? Нисек кенә булмаһын, мин быны шулай булыуын теләйем. Сөнки үҙ асылына, тамырҙарына ҡайтыу - заман талабы. Халыҡта этник үҙаң уяна, милли мәҙәниәт тергеҙелә. Әле "Урал батыр" эпосын уҡыусылар башҡарыуында ишетеү ҙә уларҙың үҙ тарихына, теленә, тарихи ҡомартҡыларына битараф булмағанын күрһәтә. Был шулай булырға тейеш тә. Беҙ ҙә ғаиләбеҙ менән Башҡортостанға килһәк, башҡорт телендә һөйләшергә, телде үҙләштерергә тырышабыҙ, ә Тываға ҡайтһаҡ, шул республикала йәшәгәс, тыва телендә һөйләшәбеҙ.

**Земфира ХӘБИРОВА**
**яҙып алды.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Республика Хәрби Дан музейында ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған күргәҙмә асылды. Унда Башҡортостандың берҙәнбер ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, данлыҡлы осоусы-штурмлаусының тормошона һәм хәрби эшмәкәрлегенә ҡағылышлы мемориаль реликвиялар, фотодокументтар менән танышырға була.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия буйынса комиссия документтар ҡабул итә башланы. Дәғүәселәрҙең эштәре ағымдағы йылдың 1 сентябренә тиклем 450079, Өфө, Октябрҙең 50 йыллығы, 13, БР Журналистар союзы, 1007-се офис (Матбуғат йортоноң 10-сы ҡаты) адресы буйынса ҡабул ителә. Телефон (факс): (347) 276-42-66.

✓11 - 15 июлдә Архангел районының Абҙан ауылы янында "Турфест-2012" XXII асыҡ республика йәштәр фестивале үткәрелә. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, турфестың ҡатнашыусылары - Башҡортостан райондарынан һәм Рәсәй төбәктәренән килгән йәштәр командалары (35 йәшкә тиклем). "Турфест-2012" фестивалендә ҡатнашыуға заявкалар 3 июлгә тиклем БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығында ҡабул ителә.

✓Рәсәй Федерацияһының Дәүләт Думаһы илдең Хеҙмәт кодексына төҙәтмәләр менән закон проектын ҡабул итте,. Уға ярашлы, 2013 йылдан май байрамдары Яңы йыл каникулдары иҫәбенә ике көнгә оҙайтыла. Шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙә ғинуарҙағы байрам көндәре ундан һигеҙ көнгә тиклем ҡыҫҡартыла. Бушатылған ике көн 1 йәки 9 май көндәренә өҫтәләсәк.

✓Өфөлә "Беренсе тапҡыр беренсе класҡа. Етем балаларға ярҙам ит" хәйриә акцияһы старт алды. Йола буйынса, уны Өфөнөң Опека һәм попечителлек буйынса идаралығы үткәрә. Өҫтәмә мәғлүмәтте 241-43-90 телефоны буйынса алырға мөмкин.

✓Өфө районының Чесноковка ауылында яңы почта бүлексәһе төҙөлә башланы. Әлеге ваҡытта 4000 кешене хеҙмәтләндергән бүлексә иҫке бараҡта урынлашҡан һәм 10 кв. метр самаһы майҙанды биләй. Яңы элемтә бинаһы майҙаны 160 квадрат метрлыҡ айырым бинала урынлашасаҡ.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ҠАН ХӘТЕРЕ...

## ул дәһшәтте һаман онотторМАЙ

**Донъя тарихында иң ҡанһыҙ ваҡиға булып ҡалған Бөйөк Ватан һуғышының ҡайтауазы әле булһа тынмай. Киреһенсә, йылдар үткән һайын тауышы көсәйгәндән-көсәйә төҫлө. Күңелендә ошо ҡайтауазды йөрөтмәгән кеше юҡтыр ул илебеҙҙә. Ололар ғына түгел, йәш быуын, бала-саға ла хатта ете тиҫтәгә яҡын йыл элек булып үткән яу яңғырашын үҙ йөрәгендә ишетә. Барыһы ла кисә генә булған кеүек. Уйлай китһәң, ни эшләп бөгөнгө балалар күңелендә һуғыш эҙҙәре ята, тигән һорау тыуа. Улар тыныс ваҡытта тыуа, күптәре арабыҙҙа бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалған ветерандарҙы ла күрмәй бит. Ошо һуғыш менән бәйле тойғолар, һуғыштан ҡалған хәтер быуындан-быуынға ҡан менән күсеп килә-ләр ул, күрәһең. Ҡан хәтере… Бына нимә яу ваҡиғаларын онотторМАЙ. Ҡан хәтере йәнде әрнетә, әммә тыныслыҡ юлынан аҙаштырмаҫ бер нур булып тора, үткән хаталарҙы ҡабатлауҙан аралай.**



22 июнь - Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн илдә Хәтер һәм ҡайғы көнө тип билдәләнә. Ошо көндә өсөнсө йыл рәттән Өфөнөң Еңеү паркында "Иҫкә ал мине" акцияһы үткәрелә. Һуғыш ветерандарының фоторәсемдәрен йыйыу, улар хаҡында ҡыҫҡаса мәғлүмәт туплау Башҡортостан юлдаш телевидениеһы ойоштарған был саранның төүге аҙымы булды. Әлеге мәлгә республикабыҙҙың төрлө мөйөшөнән барлығы өс меңгә яҡын фото ебәрелгән. Быйыл да Еңеү паркында улар экспозицияға ҡуйылды. Социаль-патриотик акцияның маҡсаты йәкташ яугирҙарыбыҙҙы иҫкә алыу ғына түгел, ә һуғыш йылдарындағы аҡ таптарҙы юйыу - хәбәрһеҙ юғалған яугирҙарҙың яҙмышын асыҡлау ҙа. Сара барышында эҙәрмәндәр отряды эшләне. Теләгән һәр кемгә бында үҙ яҡыны, туғаны хаҡында мәғлүмәт алырға йәки мөрәжәғәтен ҡалдырырға мөмкин булды.

Башҡортостандан барлығы 700 меңдән ашыу яугир фронтҡа китә. 322 меңдән ашыу яҡташыбыҙ яу яланында ятып ҡала. Сағыштырыу өсөн - республикала ул ваҡытта 2 миллион 600 мең кеше йәшәй. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, 127 мең һалдат һәм офицер хәбәрһеҙ юғалған тип һанала. Республика эҙәрмәндәр фонды етәксеһе Илдар Бикбаев түбәндәгеләрҙе һөйләне:

- Оборона министрлығының электрон дөйөм мәғлүмәт базаһы яҙмышында күбеһе үҙ туғандары хаҡында хәбәрҙәр була ала. Ваҡытында тап Республика эҙәрмәндәр фонды ошо электрон базаны булдырыу тәҡдиме менән Рәсәй Президентына сыҡҡайны. Сайт әҙләкһеҙ яңы мәғлүмәт менән тулыланып тора. Әммә хәбәрһеҙ юғалғандарҙың яҙмышын (уларҙың исемлеге сайтта булһа) ошо база аша ғына асыҡлау мөмкин түгел. Эҙәрмәндәр отрядтары һуғыштар барған ерҙәң төрлө урындарында эшләй, ләкин яугирҙарҙың яҙмышы осраҡлы рәүештә генә асыҡлана. Ә хәбәрһеҙ юғалған туғанын һәр кем үҙе махсус рәүештә эҙләһә, юллап йөрөһә, эш һөҙөмтәлерәк була. Белгестәргә мөрәжәғәт итеүе яҡшыраҡ. Сөнки документтағы сығанаҡтарҙы файҙаланыу өсөн архивтарҙа эшләү тәжрибәһе кәрәк. Документтарҙа бер ни ҙә теүәл әйтелмәй. "Юл араһынан" уҡый белергә, унлаған, йөҙләгән фамилияны сағыштырырға, улар араһында бәйләнеш табырға кәрәк...

Бер һалдаттың яҙмышын асыҡлау өсөн, ғәҙәттә, бер ай самаһы ваҡыт талап ителә, ти Илдар Зиннур улы. "Ни тиклем ҡыҙғаныс һәм ҡурҡыныс яңғырамаһын, һуғыш мәлендә кеше ғүмеренең бер ҡәҙере лә булмаған. Хәбәрһеҙ юғалһа, уны шунда уҡ иҫәптән һыҙып ташлағандар. Аттар исемлеге, кеше исемлеге менән сағыштырғанда, күпкә теүәлерәк һәм ҡатыраҡ алып барылған. Мәсәлән, авиация һөжүмендә 47 ат һәләк була икән, һәр ат исемләп теркәлгән. Сөнки ат - матди ҡиммәт. Ә 47 кеше һәләк булһа, бер фамилия ла теркәлмәйенсә, подразделение һәм ул юғалтҡан һалдаттарҙың һаны ғына билдәләнгән. Был күренеш бигерәк тә һуғыштың тәүге ике йылында хөкөм һөргән", - ти И. Бикбаев.

Әлеге көндә республика эҙәрмәндәр фонды егермеләгән отряд тәшкил итә. Мөрәжәғәттәр көн һайын килеп тора. Бөгөнгә экспедициялар ваҡытында биш тиҫтәгә яҡын яҡташыбыҙ табылһа, архив сығанаҡтары буйынса ике меңдән ашыу яугирыбыҙҙың яҙмышы асыҡланған. Хәтер һәм ҡайғы көнөндә лә фондҡа мөрәжәғәт итеүселәр күп ине. Акция башланмаҫ элек үк һуғышта хәбәрһеҙ юғалғандарҙың туғандарынан оҙон сират хасил булды. Ә Еңеү паркына килә алмаған күпме Өфө, Башҡортостан халҡы атаһының, олатаһының яҙмышын белмәй йәшәй! Һуңғы һалдат ерләнмәйенсә, һуғыш дауам итә, тигән арҙаҡлы полководец. Тимәк, бик күптәр өсөн Бөйөк Ватан һуғышы тамамланмаған әле. Акцияға килеүселәрҙең күбеһе һуғышта ҡатнашыусыларҙың улдары һәм ҡыҙҙары - оло йәштәге ағай-апайҙар ине. Һәр кемдең үҙ тарихы, үҙ хәтере һәм ҡайғыһы. Кемдер "Аллаға шөкөр, беҙҙең өсөн һуғыш тамамланды, ниһайәт, атайҙың ерләнгән урынын таптыҡ", ти. Ә кемдер һаман да эҙләнеүҙәрен туҡтатмай, яҡыны тураһында ниндәй ҙә булһа хәбәр көтә.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Сарала хәрби-патриотик клубтарҙа тәрбиәләнеүселәр ҡатнашлығында һуғыш ваҡиғаларынан реконструкция үтте, Башҡорт дәүләт филармонияһының милли симфоник оркестры һәм хор капеллаһы башҡарыуында хәрби йырҙар яңғыраны. Сәскәләр һалыу һәм шәмдәр ҡабыҙыу тантанаһы булды. Хәтер көнө тынлыҡ минуты менән тамамланды.**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# БЕР ЙЫЛ ХЕҘМӘТ...

## йә ике йыл төрмә

**Бер танышым улын урамда туҡтатып, полицейскийҙар уның армияға саҡырыу тураһындағы документтарын һорап бәйләнеүе тураһында һөйләп алтыратты. Уларға шундай хоҡуҡ бирелгәнме? Ғөмүмән, егеттәрҙе армияға саҡырыу тәртиптәре тураһында белешмә бирһәгеҙ ине.**

- Армияға саҡырылыусы кешегә ошо турала повестка тапшырылғас, "Хәрби бурыс һәм хәрби хеҙмәт тураһында"Законға ярашлы, саҡырылыусының комиссияға килеүен тәьмин итеү эске эштәр органдарына йөкмәтелә. Ошонoң менән бәйле, полиция хеҙмәткәрҙәре йәш кешенең документтары, шулай уҡ хәрби иҫәп документтары менән ҡыҙыҡһына икән, тимәк, ул "проблемалы" граждандар исемлегенә эләккән, тип аңларға кәрәк. Шуға повестка алыу менән хәрби комиссариатҡа килеп, саҡырылыу менән бәйле бөтә процедураларҙы үтергә кәрәк буласаҡ. Ә инде полиция өсөн граждандарҙы саҡырыу комиссияһына килтертеүгә военкоматтың яҙма мөрәжәғәте нигеҙ булып тора. Военкомат шулай уҡ хоҡуҡ һаҡлау органдарына армияға саҡырылыуҙан тайпылған кешеләрҙең ҡайҙа йөрөүен һәм йәшәүен асыҡлауҙы ла һорай ала. Ундай кешеләр административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында протокол төҙөү өсөн полиция бүлегенә килтерелеүе ихтимал.

**Армияға саҡырылыуҙан тайпылған кешеләргә ниндәй яза янай?**

Ундай кешеләрҙең енәйәти йәки административ яуаплылыҡҡа тарттырылыуы ихтимал. Административ яуаплылыҡ өсөн - 500 һум, енәйәт яуаплылығы өсөн 200 мең һумға тиклем штраф һәм 2 йылға тиклем ирекtән мәхрүм итеү ҡаралған.

**Армияға барыуҙан баш тартыусы хөкөм ителгән хәлдә, ул төрмәлә ултырған ваҡыт хеҙмәт итеү ваҡытына иҫәпләнәме?**

- Юҡ, төрмәнән сыҡҡанда гражданға 27 йәш тулмаған булһа, ул хәрби хеҙмәткә саҡырыла.

**Улым аспирантурала уҡый. Армияға повестка килһә, уға ни эшләргә?**

- Граждандарҙың юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң да белем алыуын дауам итеү хоҡуғын береү ҙә тыймаған. Аспиранттарға уҡыуын тамамлап, ғилми эшен яҡларға мөмкинлек биреләсәк. Повестка ебәрһәләр, улығыҙға аспирант булыуы, нисәнсе курста уҡыуы тураһындағы документтары менән саҡырыу комиссияһы ултырышына барырға кәрәк. Былар бөтәһе лә иҫәпкә алынасаҡ. Көндәҙге бүлектә уҡыусы аспирантты армияға ебәрергә тейеш түгелдәр.

**Армияға алынасаҡ егеттең ата-әсәһе саҡырыу комиссияһы ҡарары менән риза булмаған осраҡта уларҙың ниндәй хоҡуҡтары бар?**

- Армияға алыныусыға ҡарата саҡырыу комиссияһы ҡарары менән риза булмаған осраҡта закон тарафынан юғары саҡырыу комиссияһына мөрәжәғәт итеү хоҡуғы ҡаралған. Уның яуабы ла ҡәнәғәтләндермәһә, судҡа мөрәжәғәт итергә мөмкин. Бындай хоҡуҡҡа армияға саҡырылыусы үҙе лә, уның законлы вәкилдәре лә эйә.

**Улыбыҙҙы хеҙмәт итеүгә Башҡортостанға яҡыныраҡ ергә һорап ҡалдыра алабыҙмы?**

- РФ оборона министры һәм Генштаб ҡарары буйынса хәҙер егеттәр мөмкин тиклем йәшәгән урынына яҡыныраҡ ерҙә хеҙмәт итеүгә ҡалдырыла. Был тәү сиратта өйләнгән, балалары һәм пенсия йәшендәге ата-әсәһе булған граждандарға ҡағыла.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## Оло кешенең быуыны ҡатыусан



Дарыу ололарға зыян ғына итеүе мөмкин. Шуға ла уларға үләндәр шифа бирә. Ҡырҡбыуынды (шыршы ла тиҙәр) бер өлөш, бәпкә үләнен бер өлөш, ҡара ҡарағат япрағын бер өлөш, ат ҡуҙғалағы (каштан конский) ҡабығын бер өлөш алып, бергә болғатырға. Өс ҡалаҡ ҡатнашманы өй температураһындағы 0,75 литр һыуға һалып, 10-12 сәғәт төнәтергә, 15 минут ҡайнатып һөҙөргә. Шуны көнөнә өс мәртәбә өстән бер стаканлап эсергә. Дауаланыу - ике-өс аҙна.

## Һыу -ҙур дауа.

Ҡулдарҙы бармаҡтарҙан башлап өҫкә табан ҡойондороу шифалы, бының өсөн булмә температураһы йылылығында 10 литр һыу кәрәк. Артрит, ревматизм ваҡытында был файҙалы. Аҙ хәрәкәтләнеүсе, ихтыяр көсө булмағандарға ла бындай ҡойоноу ярҙам итә.

## Кәбәк - бик файҙалы аҙыҡ.

Уны икмәккә ҡушып бешерәһең. Кәбәктә В1, В2, РР витаминдары, минераль матдәләр күп. Кәбәк эс ҡатҡанда дауалай, холестериндың ҡанға һеңеүен кәметә, организмдан зарарлы матдәләрҙе ҡыуып сығара. Боронғолар ашаған кәбәк бөгөн дә кешеләрҙе дауалай.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**

## Һалҡын тейгәндә

Һалҡын алдырғаныбыҙҙы һиҙһәгеҙ, шунда уҡ лимонлап сәй эсегеҙ һәм аяҡтарығыҙҙы йылы һыуға тығып ултырығыҙ. Аяҡтарҙы яҡшылап ҡороҡас, үксәләргә йод һөртөп, йөн ойоҡбаштар кейегеҙ, ә аяҡ бармаҡтары араларын вьетнам бальзамы менән ыуығыҙ. Ойоҡтарға горчица һибегеҙ. Йүкә, ҡурай елəгенән яһалған тирләтеүсе сәй эсегеҙ.

Меңъяпраҡ, һары мәтрүшкә, аҡ сәскә төнәтмәләрен күберәк эсегеҙ. Аскорбин кислотаһына бай аҙыҡтар - һуған, һарымһаҡ, гөлйемеш, ҡарағат, мүк еләге, цитруслылар файҙалы. Шулай уҡ балды ла онотмағыҙ.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *"Иң ҡәҙерле байлығыбыҙ алтын-гәүһәр түгел, ә таҙа эсәр һыу, таҙа һауа, таҙа тәбиғәт, - тине Роберт Юлдашев. - Ҡырҡылған бер ағас урынына унды ултыртып була, шартлатылған тау урынына ғына тау ҡуйып булмай."*



АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# ИЛЬӨЙӘРЛЕК ҠАЙҘАН БАШЛАНА?

**Былтыр ҡала мәктәптәренең береһендә һуңғы ҡыңғырауға арналған тантанала ҡатнашырға тура килгәйне. Сығарылыш уҡыусыларының ҡыҙылға алтын хәрефтәр менән яҙылған ҡәҙимге таҫма урынына ил символикаларының береһен белдергән флаг түшендәге таҫма тағыуы шунда уҡ күҙгә ташланды.**

Янымдағы уҡыусынан түшенә ниндәй таҫма тағыуы тураһында һорайһы иттем. Үҫмер албырғап ҡалды. Класташы ярҙамға килде уға:

- Белмәйһегеҙме ни, ил флагы бит!

- Ә уның төҫтәре нимәне аңлата һуң?- тип төпсөндөм мин.

Егеттәрҙең береһе лә яуап бирә алманы. Ҡайһы саҡта ҡапыл бирелгән һорауға, белһәң дә, шунда уҡ яуап биреп булмай шул. Шулай ҙа ғәм алдына тағып сыҡҡас, был йәштәр ил символикаһының төп атрибуттарын белергә тейештәрҙер һымаҡ ине.

Бөйөк Еңеү алдынан мәктәптәге осрашыу ваҡытында Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының береһе:

-Советтар Союзы Геройҙарынан кемдәрҙе беләһегеҙ?- тип уҡыусыларға мөрәжәғәт итте. Кластан бер кем дә яуап бирә алманы.

-Исемдәре әҙәби китаптарға ингән, нәфис фильмдар төшөрөлгән, бөйөк ҡаһарманлыҡ өлгөһө булған геройҙарҙың береһен булһа ла атағыҙ инде,- тип ныҡышты фронтовик.

Кемдер ҡыйыуһыҙ ғына һуғыштың тәүге йылында уҡ Ленинград янында фашист самолеттарын бәреп төшөрөүсе совет летчигы Жуковты атаны. "Бөйөк Ватан һуғышы осоронда дошман менән алышта батырлыҡ күрһәтеп, 11 меңдән ашыу совет һалдаты Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған, шуның бер өлөшө был исемде үлгәндән һуң алған. Мәләүез районында был данлы исем 11 яугирға бирелгән", тип әйтеп ҡуйҙы ветеран. Бер фамилияны ла иҫкә төшөрә алмаған уҡыусылар, баштарын эйә биреберәк, тын ҡалдылар. Шуныһына һөйөндөм: улар йәшендә генә ҡулына ҡорал тотоп, үлемесле яуға киткән ҡарт һалдат алдында белдекһеҙлектәре өсөн выждан ғазабы кисерә, ғәрләнә ине улар.

Йәш быуында бөгөн илһөйәрлек, ватансыллыҡ тойғоһо булмауының ике генә миҫалын килтерҙек. Ике осраҡта ла кемдер уҡытыусыларҙы ғәйепләр. Тарих дәрестәрендә, класс сәғәттәрендә был хаҡта мәғлүмәт еткерелергә тейеш, тиер. Эйе, был йәһәттән уҡытыусыларға ҙур бурыс йөкмәтелгән һәм уны улар намыҫ менән атҡара, әммә мәғлүмәт биреү генә аҙ. Балаларҙың күңеленә үтеп инеү кәрәк. Һоҡланырға, ғорурланырға, нәфрәтләнергә, сағыштырырға өйрәтеү мөһим.

Ғөмүмән, уҡыусыларҙа илһөйәрлек хисе булмауында бөтә йәмғиәтебеҙ менән ғәйеплебеҙ. Туҡһанынсы йылдар башынан ватансыллыҡ тәрбиәһе бирелмәй беҙҙә. Рәсәй, Башҡортостан гимндары һүҙҙәрен яттан белгән кеше бармы хәҙер? Ә һикһәненсе йылдар аҙағына тиклем Советтар Союзы гимнын һәр кем белә ине. Гербтағы төҫтәрҙе-билдәләрҙе лә белмәгән уҡыусы булмағандыр.

Эйе, уҡытыусылар балаларға башҡорт халҡы тарихында оялырлыҡ, намыҫланырлыҡ бер генә бит тә булмауын да һөйләргә тейеш. Уларға башҡорттарҙың бер ҡасан да илбаҫарлыҡ менән шөғөлләнмәүен, ихтилалдарға тик үҙ азатлығын, иркен, тыуған төйәген сит-ят ҡулына бирмәҫ өсөн генә күтәрелгәнлеген һеңдереү мөһим. Аҫабалыҡ хоҡуғы тураһында, ғәзиз ерҙәребеҙҙең нисек таланыуын, һатылыуын, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәрен белһен һәр бала, шул саҡта ғына ул үҙ районының, республикаһының, Ватанының ысын патриоты булып үҫер. Илһөйәрлек шунан башлана. Ә бер ни аңламай, ил флагын түшкә тағып йөрөү генә ватансы булыуҙы аңлатмай әле.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

УЯН, УЙЛАН, КЕШЕ!

# ТОРАТАУ ТОРА, ТОРАСАҠ!



**Ошо көндәрҙә Ишембай районы биләмәһендәге Торатау итәгендә этник музыка фестивале үтте. Башҡортостандың халыҡ артисы виртуоз ҡурайсы Роберт Юлдашев ойошторған был фестивалдә уның "Ҡурайсы" төркөмөнән тыш, этно-рок стилендә йырлаусы "Арғымаҡ" һәм Екатеринбургтан "Sage" төркөмдәре ҡатнашты. Сарала шулай уҡ Стәрлетамаҡ районы Айыусы ауылынан "Юрматы" башҡорт халыҡ фольклор ансамбле һәм халыҡ йырҙарын яңғыҙ башҡарыусы йәш йырсылар ҙа сығыш яһаны. Концерт мәрхәмәтлек акцияһы сиктәрендә үткәрелде һәм тауҙың именлеген, таҙалығын һаҡлауға, йәнә Бөйөк Ватан һуғышы ҡорбандарын иҫкә алыуға арналды.**

## Ямғыр аҫтында ҡурай моңо

Билдәләнгән ваҡытҡа данлы юрматы еренә аяҡ баҫыуыбыҙ булды, ҡойоп ямғыр яуып ебәрҙе. Торатау эргәһенә йыйылып өлгөргән Ишембай кешеләре "Өфөләләр беҙгә ямғыр килтерҙе" тип ҡыуанһа ла, тамашаға килергә ниәтләгән күптәр өсөн был ямғыр өйҙән сыҡмаҫҡа сәбәп булды ла ҡуйҙы. Халыҡ әллә ни күп йыйылманы. Йәғни сарала ишембайҙарҙан бигерәк өфөләләр күпселекте тәшкил итте. Ә шулай ҙа этно фестивалде ойоштороусы егеттәр аптырап ҡалманы. Аппаратураларын көйләп, ялан яңғыратып ҡурай һыҙҙырып, концертты башлап та ебәрҙеләр.

Ямғыр иһә берсә тымып, берсә һибәләп, кешеләрҙе уртаҡ ышыҡ эҙләргә мәжбүр итте. Тик артистар ғына ямғырға иғтибар итмәне. Улар үҙҙәренең ҡыйбатлы аппаратураларын полиэтилендар менән ҡапланы ла, ҡыйыҡ-фәләне булмаған сәхнәлә ямғырға лысма һыуланып, сығыш яһауҙы дауам итте. Бына ҡайҙа ул фиҙаҡәрлек! Йыйылған халыҡ был фиҙаҡәрлекте баһаланы, сығыштарҙы дәррәү күтәреп алды, ҡушылып бейене, йырланы, рухланды. Майҙанға ла сәхнәләге егеттәр кеүек үк рухты алға һөргән, изге ерһыуҙы ҡәҙерләргә һәм һаҡларға әҙер торғандар ғына йыйылғайны, ахры.

Эйе, Торатау тирәһендә ямғыр болоттары ғына түгел, ә сәйәси болоттар ҙа әленән-әле ҡуйырып тороуы тураһында һүҙҙәр тынғаны юҡ. Стәрлетамаҡ ҡалаһының "Сода" асыҡ акционерҙар йәмғиәте күптән инде Торатауҙы шартлатып, уның эзбизташын үҙләштерергә яҫҡына. Әлбиттә, эзбизташҡа ла, объектҡа ла бер ниндәй ҙә экспертиза үткәрелмәгән, буласаҡ экологик эҙемтәләр, юғалтыуҙар, хатта һыу баҫыу кеүек фажиғәләр ҙә иғтибар үҙәгенә алынмаған, тиҙәр. "Сода"ны Торатауҙың "танау төбөндә" булыуы, анһат һәм арзанлы сеймал алыу мөмкинлеге нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Ә урындағы халыҡ белә: Торатауҙы шартлатыу имен барып бөтмәйәсәк, оло экологик эҙемтәләр ҡотолғоһоҙ буласаҡ. Унан һуң, Торатау изге әүлиәләр күмелгән урын булараҡ та урындағы халыҡ өсөн ҡәҙерле. Әүлиәләр рухы ла бирмәҫ Торатауҙың юҡҡа сығыуына, тип ышана улар. Ошо хаҡта "ҡыҙыу баштарға" белгертергә теләп, Торатауға яҫҡыныусыларҙы аҡылға килергә саҡырып, акциялар әленән-әле үтеп тора бында. Уны күберәк Өфөләге яҡташтар, экологтар, энтузиастар ойоштора. Роберт Юлдашев бына икенсе тапҡыр ойоштора был акция юҫығындағы сараны. Әлеге концерт барышында ул ҡурай моңо ярҙамында халыҡҡа ата-бабалар аманатын - Торатауҙы һаҡлау идеяһын тапшырҙы. "Иң ҡәҙерле байлығыбыҙ алтын-гәүһәр түгел, ә таҙа эсәр һыу, таҙа һауа, таҙа тәбиғәт, - тине Роберт Юлдашев. - Ҡырҡылған бер ағас урынына унды ултыртып була, шартлатылған тау урынына ғына тау ҡуйып булмай. Һаҡлайыҡ тауыбыҙҙы!"

## Ҡомартҡы иҫәбенә түгел...

Стәрлетамаҡта йәшәүсе ярты меңгә яҡын халыҡты эш урыны менән тәьмин иткән "Сода"ға ҡаршы түгел был акцияны ойоштороусылар. Был турала фестивалде ойоштороусыларҙың береһе - Ишембай районының әүҙем йәмғәт эшмәкәре Абдрахман Вәлидов та белдерҙе. "Әйҙә, сәскә атһын был тармаҡ, тик халҡыбыҙ ҡомартҡылары иҫәбенә түгел", - тине ул. Аҡһаҡал әйтеүенсә (бындай сара ойошторорға йөрьәт иткән кешене икенсе төрлө атағы ла килмәй), Башҡортостанда 40 эзбизташ ятҡылығы бар. 200 километр арауыҡтарҙа урынлашҡан ятҡылыҡтар ҙа "Сода" өсөн рентабелле, йәғни, уңайлы булыр ине. Тик ниңәлер "Сода"ға улар түгел, ә 20 километр арауыҡта ғына ятҡан Торатау йә Йөрәктау кәрәк.

Һүҙгә Стәрлетамаҡтан килгән, шулай уҡ Торатау кеүек шихандар яҙмышы өсөн битараф булмаған әүҙем йәмғәт эшмәкәре Олег Машковский ҡушыла: "Бөгөнгө ысынбарлыҡҡа күҙ һалғанда, Магнитогорск металлургия комбинаты үҙенә сеймалды ситтән ала һәм бының менән уның етештереү кимәле бер ҙә генә лә кәмемәй. Хатта тотош илдәр иҡтисады ла, мәҫәлән, Японияны алайыҡ, ситтән килтерелгән сеймалға ҡарап тора, әммә бының менән берәү ҙә отолмай. Әлбиттә, үҙ сеймалың булмағас, сеймал һатыусылар менән килешеп хеҙмәттәшлек итергә, бер аҙ "ҡыбырларға", хатта сығымдар түгергә кәрәк. Уның ҡарауы, тауҙар емерелмәй, ер ҙә шахталар менән йырғысланмай, шул уҡ ваҡытта алдынғы технологияларға өҫтөнлөк бирелә һәм етештереү ҙә алға китә..."

## Изгеләр янына - изге ниәт менән

"Йорт имен булһын, эштәр алға барһын, ғаиләләрҙә тыныслыҡ, бәрәкәт булһын өсөн Торатау түбәһенә бер тапҡыр булһа ла күтәрелергә, теләктәр теләргә кәрәк, тип өйрәтә ине Зөләйха өләсәйем, - тип, бала саҡ хәтирәләренә бирелде Стәрлетамаҡ районы Айыусы ауылынан килгән хаҡлы ялдағы хеҙмәт ветераны Миңнур Ихсанова. - Хәҙер беҙ ҙә олоғайҙыҡ, был тауға үҙебеҙҙең ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙе алып киләбеҙ, уларҙы ошо тау менән таныштырабыҙ, риүәйәт-легендаларҙы һөйләйбеҙ, тәбиғәт ҡомартҡыларына ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәттә булырға кәрәклекте һеңдерәбеҙ..."

"Республика Башкортостан" гәзитенең Ишембайҙағы хәбәрсеһе Анастасия Новодержкина интернетта Торатауҙы һаҡлаусылар төркөмө ойошторолғас, уларға ҡушылып китеүе тураһында бәйән итте: "Торатау минең өсөн дә изге урын. Башҡорттарҙың, Торатау башында теләнгән барлыҡ теләктәр ҙә ҡабул була, Тәңрегә барып ишетелә, тигән инаныуына мин дә ышанам. Был ышаныс беҙҙе ошо тауҙың именлеге өсөн үҙ һүҙебеҙҙе әйтергә әйҙәй". Ул тағы ла ошо тәбиғәт ҡомартҡыһы тирәһендәге таҙалыҡ өсөн дә борсолоуын белдерҙе: "Бөгөн бында экологик өмә ойошторолоуы ла маҡтауға лайыҡ, тип уйлайым. Сөнки халыҡта тәбиғәттә ял итеү мәҙәниәте һанға һуғылмай. Тағы ла, бындай саралар Торатау, Йөрәктау кеүек тәбиғәт ҡомартҡыларына иғтибар йүнәлтеү йәһәтенән дә бик отошло. Беҙҙең матур тәбиғәтебеҙ, иҫ киткес мәҙәниәтебеҙ бар һәм был турала башҡаларға белгертергә кәрәк", - тип тамамланы Анастасия һүҙен.

Фестивалгә Стәрлетамаҡ ҡалаһынан велосипедтарҙа килеүсе бер төркөм йәш егеттәр менән дә таныштыҡ: "Торатауҙы һаҡлау тигәндә беҙ ямғыр түгел, таш яуһа ла килер инек..." - тине улар. Байкерҙар етәксеһе Петр Пономарев өсөн дә был сара ҙур әһәмиәткә эйә. Бала сағынан ялан тәпәй йүгереп үҫкән Торатауҙың киләсәге уны ла бик борсой. Ул үҙе менән Стәрлетамаҡтан 15 "вело-һыбайлы" эйәрткән. "100-гә яҡын кеше теләк белдергәйне бында килергә, әммә ямғыр ҡамасауланы. Ә сараны ойоштороусыларға бер ни ҙә ҡамасауламаған, уларға һоҡланмай мөмкин түгел!" - тине ул.

Өфөнән килгән Дим Вәлитов атлы ир-уҙаман да бик фәһемле фекерҙәре менән уртаҡлашты. "Үҙ аңыбыҙҙы үҙгәртмәй тороп, Торатау һымаҡ ҡомартҡыларыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу ауыр буласаҡ, - тине ул. - Ябай ғына миҫал: Торатау - эзбизташтан тора. Эзбизташтан эшләнгән соданың 90 проценты быяла етештереү өсөн ҡулланыла. Ә кеше бәхетле булһын өсөн күпме быяла кәрәк икән? Быяла бик күп булыу менән кемдер бәхетлерәк булып китерме икән? Кешелек үҙен-үҙе юҡ итеү сигенә килеп еткән ваҡытта йәшәйбеҙ. Торатау - ул, ғөмүмән, ерҙең бишеге. Ошо ҡомартҡыны юҡ итеүгә юл ҡуйһаҡ, оло хата эшләнәсәк... "

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Донъяла бер ни ҙә мәңгелек түгел. Кемдең йә нәмәнең был донъяла күпме йәшәрен Юғары көс кенә хәл итә. Тауҙың-тауының яҙмышын хәл итә алам, тип уйлай икән кемдер, ул төптө яңылыша. Шулай булғас, ҡомартҡыны уландарына теүәл, имен көйөнсә ҡалдырырға тип зар илаған ҡарттар яғындамы, әллә тау һынлы тауҙы теҙ сүктерергә иткән "Сода" етәкселеге яғындамы дөрөҫлөк?**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Ошо көндәрҙә Салауат районының бәләкәйҙәрҙән һаналған Шәрәк ауылы халҡы үҙ көсө менән шәжәрә байрамы ойоштороп, башҡаларға матур өлгө күрһәтте. Юҡҡа ғына боронғолар "Алтын ҙур булмай" тимәгән икән. Шәрәк тә бәләкәй, әммә унда йәшәгән халыҡтың әүҙемлеге, тырышлығы, маҡсатҡа ынтылышы, милли рухы башҡаларға бушлай өләшкәндә лә кәмерлек, һайығырлыҡ түгел.**

# "ИМАНЛЫ АУЫЛ" ХӘРӘКӘТЕН...

## салауаттар башламаҡсы




Шәрәк - үҙенсәлекле ауыл. "Өфө губернаһының Өфө өйәҙе буйынса 1895-1896 йылдарға статистика мәғлүмәттәре" тупланмаһында ауылға төрлө яҡлы характеристика бирелә, шул иҫәптән Шәрәк йылғаһы тирмән төҙөү өсөн уңайлы булыуы тураһында ла яҙыла: "Халҡы: аҫаба башҡорттар. Ерҙәре бер урында ғына. Тирмән урыны (2 дисәтинә) - йылына 10 тин түләү иҫәбенән 12 йылға ҡуртымға бирелгән. Шулай уҡ Биҙәүеш күлендә балыҡ тотоу урындары ла йылына 10 тин түләү иҫәбенән ҡуртымға бирелгән. Ауылда бер йәмәғәт тирмәне бар. Ауылдың бер өлөшөн элекке хәрби дәрәжәләге ҡырғыҙ-припущениктар алып тора. Улар 4 йортта 6 кеше йәшәй".

Әсфәндийәровтың "Башҡортостан ауылдары тарихы" китабында хәҙерге Лаҡлы ауылына нигеҙ һалыусыларҙың 1760 йылдың 3 февралендә Тырнаҡлы волосының аҫаба башҡорттарынан договор нигеҙендә һәр йорттан 25 тин түләү шарты менән мәңгелек ҡулланыуға ер алып килеп ултырыуы яҙыла. Договорҙан күренеүенсә, был территория Ҡаратаулы һәм Түбәләҫ олоҫтары ерҙәренә тиклемге майҙанды ала (йәғни, яҡынса ҡарағанда хәҙерге Лаҡлы менән Урмансы, Нәсибаш менән Лаҡлы, Сыбаркүл межаларына тиклем) һәм был территория яҡынса 6 мең гектар тәшкил итә. Тимәк, лаҡлылар Тырнаҡлы ырыуының Шәрәк ауылынан ер алған, тип раҫларға мөмкин.

Раил Кузеевтың башҡорт ҡәбиләләре классификацияһында Шәрәк ауылы ингән Тырнаҡлы ырыуы Әйле ҡәбиләһенең бер тармағы булып тора. Ә инде легендаларҙа бәйән ителеүенсә, ата-бабаларыбыҙ Һырдарья буйындағы Ҡәйеп тигән ерҙә йәшәгән. Бер заман бер байҙың аҡбуҙ аты, байталы һәм Ғәҙелбаныу тигән ҡыҙы юҡ була. Өс егет уны эҙләргә китә. Улар эҙ буйлап оҙаҡ бара һәм ҡыҙҙы Турғаяҡ эргәһендә килеп таба. Ә аттарҙың эҙе һаман Уралға китә. Егеттәр Әй буйына килеп сыға. Бында улар тәбиғәттең хозурлығына хайран ҡала: ҡуйы ҡара урмандар, бормалы йылғалар, үҙәндәр... Ул төбәктә кешеләр булмай. Егеттәр бер йылғаны - Әй, икенсеһен - Үҙән, улар араһындағы тауҙы Ҡөҙрәт тип атай. Ҙур булмаған бер йылға буйында ике атты ла табалар һәм Һырдарья буйына әйләнеп ҡайталар. Егеттәр күргәндәрен һөйләп биргәс, бөтә ырыу башҡорттары Уралға күсә. Улар араһында мырҙаларҙың ата-бабаһы - Мырҙабәк, тырнаҡлыларҙың ата-бабаһы Имса, әйлеләрҙең ата-бабаһы Имсаның туғаны Тумса ла була.

Быларҙан тыш, тырнаҡлыларҙың тарихы боронғо башҡорт шәжәрәләрендә лә сағылыш таба. Тажетдин Ялсығолдоң Әйле ҡәбиләһенең шәжәрәһендә Тырнаҡлы ырыуына нигеҙ һалыусы тип Иштәк тигән башҡорт ханы күрһәтелә. Уның һигеҙ улы була: Тамъян, Үҫәргән, Күбәләк, Бикәтун, Һарт, Тырнаҡлы, Түбәләҫ, Дыуан. Үрҙә әйтеп кителгәнсә, әгәр тырнаҡлылар араһында Шәрәк ауылында йәшәүсе ике ара төп урындарҙың береһен алып тора, ә Тырнаҡлы ырыуы шәжәрәһе атабыҙ Әҙәмдән башлана икән, тимәк, бында етди тикшеренеүҙәр алып барырға ерлек бар. Икенсе яҡтан, Тырнаҡлы ырыуы шәжәрәһе өҫтөндә ономастарға ла эшләү кәрәк, сөнки был шәжәрәлә боронғо төрки, ғәрәп һәм фарсы исемдәрен осратырға мөмкин. Бындай исемдәрҙе йөрөтөүселәр Яуын, Шәрәк, Ибрай ауылдарында осрай. Был инде ошо ауылдар халҡының боронғо сығышлы булыуына тағы бер дәлил.

Шәрәктә беренсе собор мәсете 1906 йылда төҙөлә. Унда Әбүталип Әбделхәеров хатип, Ғайнан Сиражетдинов - имам, Ямалетдин Мөхәмәтйәров мәзин булып тора. Боронғо ауыл һаналһа ла, ни өсөн бында собор мәсете һуң ғына асыла, тигән һорауҙы ла асыҡлап китеү кәрәк. Собор мәсеттәрен төҙөү өсөн шул ауылда йәшәгән халыҡтың һаны 200 булыуы мотлаҡ була. Әммә ҡайһы бер башҡорт ауылдары, бигерәк тә боронғо башҡорт ауылдары бик бәләкәй була. Сөнки улар күберәк ер алып ҡалыу, ергә аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлау өсөн ер биреп, ғаиләләрҙе икенсе ауылдарға күсереп торған. Һөҙөмтәлә тирә-яҡтағы ауылдар ҙурайған, ә инкубатор ролен үтәгән боронғо башҡорт ауылдары бер кимәлдән артмаған да, кәмемәгән дә. Шуға ла Шәрәктә собор мәсете ни бары 1906 йылда ғына асыла, әммә власҡа большевиктар килгәс, уның манараһын ҡолатып, Лағыр ауылына клуб итеп күсереп һалалар.

Ләкин ниндәй генә ел-дауылдар үтмәһен, ниндәй генә яҙмыш кисермәһен, Шәрәк ауылы бөгөн дә йәшәй, йәшәп кенә ҡалмай, хатта башҡа ҙур ауылдарға өлгө күрһәтеп, үҙ көстәре менән тиерлек ҙур байрам ойоштора. Ысынбарлыҡта бөгөн дәүләт, муниципаль биләмәләр, ауыл хакимиәттәре бәләкәй ауылдарға артыҡ иғтибар биреп бармай. Улар артыҡ йөк һымаҡ тойола. Әммә бөгөн тотош Рәсәйҙә ҡайһы бер ауылдар ер йөҙөнән юҡҡа сыҡҡан ваҡытта, тап ошо боронғо ауылдарҙа йәшәү көсө башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ һәм тап улар йәшәүҙе дауам итә. Сөнки ҙур ауылдар һәр саҡ властарҙың күҙ уңында булды, улар нәмә кәрәк - шуның менән тәьмин ителде, уларға ҙур-ҙур кредиттар бирелде. Һөҙөмтәлә, гел дәүләттән көтөп кенә өйрәнгән ҙур ауылдар, баҙар иҡтисады башланғас, йайлап ҡына юҡҡа сыға башланы. Иң тәүҙә унда етештереү предприятиелары "үлде". Гелән кемгәлер ялланып эшләп өйрәнгән халыҡ бер көндә тиерлек ярыҡ ялғаш эргәһендә аптырап ҡалды: баҡтиһәң, улар ҡушҡанды ғына эшләп өйрәнгән икән, ә эш урындары юҡҡа сыҡҡайны, нимә эшләргә белмәйенсә, халыҡ ауыл-ауылы менән эскегә бирелде. Ә бәләкәй ауылдар ғүмер-ғүмергә үҙ алдына йәшәп, үҙ йүнен үҙе күреп өйрәнгәнгә бындай һынауҙарҙы ауыр кисермәне, элек нисек үҙ алдына йәшәгән булһа, донъя көтһә, мал үрсетһә, артабан да шулай йәшәп алып китте, сөнки уларҙа үҙ аллы йәшәүгә иммунитет көслө.

Эйе, Шәрәк ауылы халҡы элек-электән донъя көтөргә тырыш, ярҙамсыл, ватансыл булды. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланып, бәләкәй ауылдар перспективаһыҙҙар исемлегенә индерелгәс, Шәрәкте лә шундайҙар рәтенә ҡуйып, уны бөтөрөргә тырыштылар, ләкин әүҙем халыҡ үҙ ауылын һаҡлап ҡалды. Бөгөн ауылда 60-ҡа яҡын йорт, дөйөм алғанда 12 трактор, 3 йөк машинаһы, еңел автомобилдәр бар. Ике крәҫтиән-фермер хужалығы ойошторолған, бер шәхси эшҡыуар үҙ магазинын асҡан. Халыҡ бер ярҙамһыҙ тиерлек, үҙ көсө менән, мәсет һала, иманға, дингә ҡайта. Ауылды "Оло ер" менән бәйләп торған берҙән-бер күпер емерелгәс, ҡайҙа ғына мөрәжәғәт итеп ҡарамай улар, ләкин үтенестәре һәр саҡ яуапһыҙ ҡала. Ахыр сиктә, шәрәктәр тоталар ҙа үҙ көстәре менән шәжәрә байрамы үткәрергә, шул һылтау менән ауылды төҙөкләндерергә, хатта күперҙе эшләп ҡуйырға ниәт итәләр. Был йүнәлештә ныҡлы өс таған - Шәрәк ауылы муллаһы, хәҙрәт Вәли Хәйретдинов, крәҫтиән-фермер хужалығы башлығы Илшат Садиҡов, ауыл старостаһы Ғималетдин Зәйнуллин - бер төптән тороп эш итә. Хатта ошо өс ир-уҙаман тотош ауылдың менталитетын үҙгәртә, тиергә лә мөмкин. Бәлки, ысынлап та, үҙҙәре күпер ҙә эшләгән булырҙар ине, ләкин муниципаль властар "йоҡонан уяна" - бер нисә көн эсендә шәрәктәр бына тигән күперле лә була. Теләк булғанда бәләкәй ауылдарҙың да мәнфәғәтен хәстәрләргә мөмкин икәнлеген ғәмәлдә күреп ышанған халыҡ хәҙер ҡасан ауылға газ үтерен түҙемһеҙләнеп көтә. Сөнки "зәңгәр яғыулыҡ" ауыл осона килеп еткәнгә инде тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт үткән, бәлки, отчеттарҙа ауылға тулыһынса газ да үткәндер, әммә халыҡ ҡына һаман өйҙәренә газ кереүен түҙемһеҙлек менән көтә. Бәлки, газ үткәреү өсөн тағы берәй байрам ойошторорға кәрәктер? Уныһына ғына ҡалһа, бында аптырап тормаҫтар. Әйтеп китеүемсә, мәсет һалалар, хәҙер инде клубты тергеҙеү эшенә лә тотонғандар. Уны ла үҙ көстәре менән йырып сығырҙарына өмөт ҙур. Ә финанс мәсьәләһен үҙҙәренсә хәл иткәндәр: магазинға ике йәшник эшләп ултыртҡандар ҙа, уның береһенә мәсет төҙөлөшөнә, икенсеһенә клубты тергеҙеүгә аҡса йыялар. Һәм иң мөһиме: әбей-бабайҙар пенсияларының бер өлөшөн, йәштәр эшләп тапҡан килеменән ошо изге эштәргә өлөш сығара. Кем күпме булдыра ала, шунса аҡса һалып китә, әммә бер тин дә һалмай ҡалған кеше юҡ.

Шәжәрә байрамында улар үҙҙәренә тағы ла бер ҙур яуаплылыҡ алды - ауылдарын "Иманлы ауыл" итеү өсөн тырышасаҡтарын белдерҙеләр. Бөгөн республикала "Айыҡ ауыл" акцияһы әүҙем бара, ләкин шәрәктәр икенсе тактика һайламаҡсы: ауыл иманлы булғанда ғына айыҡ та, тәртипле лә, тәрбиәле лә, тәүфиҡлы ла буласаҡ! Иманлы ауыл булыу өсөн ҡеүәт тә, дәрт тә етерлек шәрәктәрҙә. Беҙ уларҙың был башланғысы уңышлы булырына ышанабыҙ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ГЕРОДОТ ЯҘМАЛАРЫНДАҒЫ ТАҘҘАР

**Шәрәк ауылы матур Әй йылғаһының һул яҡ ярында, Шәрәк йылғаһы буйында, Күҫтәр тауы итәгендә урынлашҡан. Ни өсөн ауыл шулай аталған һуң? Бәлки, Шәрәк йылғаһының көнсығышҡа - шәреҡкә табан ағыуына бәйлелер. Шәреҡ тора-бара Шәрәккә әйләнгәндер? Бәлки, икенсе берәй төрлө варианты барҙыр.**

Архив документтарында Шәрәкте - Ширякова, Ширяево тип тә яҙалар. Тағы ла бер фекер бар. Белеүебеҙсә, Шәрәк халҡын таҙҙар тип тә әйтәләр. Был атаманың тарихҡа ҡағылышы бармы, юҡмы, әллә был бары тик ҡушамат ҡынамы - уныһын тарихсылар асыҡлар, әммә әйлеләр ҡәбиләһенең дыуандар, ҡаратаулылар составына, ә көнбайышта таныптарға таҙ ырыуҙары ла ҡушылған. Таҙ ҡәбиләһе хаҡында Геродоттың яҙмаларында ла телгә алына, уларҙың бик борондан Саян-Алтай тауҙарында йәшәгәнлеге лә билдәле. Хәҙер ҡаҙаҡтарҙа Кесе Йөҙҙә - таҙ, үзбәктәрҙә - манғыт, ҡырғыҙҙарҙа - сарыбағыш, Төркмәндә йомуд ҡәбиләһендә таҙ ырыуҙары булыуы билдәле. Төньяҡ Башҡортостандың Танып таҙҙары менән көнсығыштағы Әйле таҙҙары элек бер-береһенә, туғандарына барып та йөрөгән булған. Таҙҙар көнсығыштан ҙур төркөм булып килмәгәнлектән, төрлө ҡәбиләләр составында осрай, йәки улар бөтә Башҡортостанға таралған. Бәлки, таҙ атамаһы ошо ырыуҙың бер өлөшөлөр?

**Ринат СИТДИҠОВ,**
**Лағыр урта мәктәбе директоры.**

**Киләсәк йәштәр ҡулында, тибеҙ. Ә киләсәктең ниндәй булыры бөгөнгө йәштәрҙең ниндәй йәшәү рәүеше алып барыуына, ниндәй маҡсаттар ҡуйыуына һәм, әлбиттә, үҙ еренең ысын илһөйәр улы йәки ҡыҙы булыуына бәйле. Бөгөнгө көндә белемле, маҡсатлы, сәләмәт тормош алып барыусы йәштәребеҙ күп. Улар төрлө уҡыу йорттарында уҡый, төрлө тармаҡта эшләй, ләкин барыһын да бер үҙенсәлек берләштерә - уларҙың барыһы ла яҡты киләсәктең нигеҙе нәҡ бөгөн һалына икәнлеген аңлап йәшәй. Ошондай йәштәребеҙ араһында Мәскәүҙәге Бауман исемендәге университеттың инженер бизнесы һәм менеджмент факультетын тамамлаусы, Англияның Лестер-Бизнес мәктәбендә Халыҡ-ара бизнес һәм финанстар һөнәре буйынса белем алып ҡайтып, бөгөнгө көндә Мәскәү ҡалаһында эшләп йөрөүсе Айбулат ЙӘНТУРИН да бар. Уның Өфөгә ҡайтыуын ишеткәс, редакцияға саҡырып, әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# Үҙ ҡаҙанында ҡайнама, ситтәрҙе лә күреп ҡайт



*Мөмкинлек булһа, бер аҙ ситтә йәшәп ҡайтыуҙа бер хилафлыҡ та күрмәйем. "Йөрөгән таш шымара, ятҡан таш мүкләнә" тигәндәй, аралашыуҙар, башҡа мәҙәниәт, икенсе төрлө тормош менән танышыу үҫергә ыңғай импульс ҡына бирә, минеңсә. Ләкин ниндәй юлды һайлаһа ла, кеше үҙ тамырҙарын, тарихын онотмаҫҡа, әллә күпме сит тел өйрәнһә лә, туған телен хөрмәт итергә һәм барлыҡ эшмәкәрлеген киләсәктә тыуған еренә файҙа килтерерҙәй һөнәрҙәрҙе өйрәнеүгә бағышларға тейеш. Тормоштағы барлыҡ уңыштарың, ҡаҙаныштарың өсөн айырым кешегә түгел, ә халҡыңа бурыслы икәнебеҙҙе оноторға ярамай.*

## Йөрөгән таш шымара

Мәктәп йылдарында миндә барлыҡ фәндәр ҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятһа ла, физика һәм математикаға иғтибарым көслөрәк булды һәм ошо йүнәлеш буйынса белем алыу теләге мине Мәскәү ҡалаһына алып барҙы. Мәктәп йылдарында ла, университетта ла төплө белем алыу, тырышлыҡ, маҡсатҡа өлгәшеү кеүек бурыстар минең өсөн тәүге урында торҙо. Тырышлыҡтың һәр саҡ һөҙөмтәһе була, һәм мин ике тапҡыр Башҡортостан Республикаһы Президенты стипендиаты булыуға өлгәштем. Университеттың 4-се курсын тамамлағас, уҡыуҙағы уңыштарым, фәнни эшмәкәрлегем, Мәскәүҙә Башҡортостан студенттары һәм йәштәре менән әүҙем эш алып барыуым республика Хөкүмәтенең маҡсатлы грантын алыу һәм сит илгә уҡырға барыу мөмкинлеге бирҙе. Англияла бер йыл уҡыным һәм шулай уҡ  эшмәкәрлеге төрлө илдәрҙәге студенттарға донъя кимәлендә белем алырға булышлыҡ итеү менән бәйле Global Education Support Services компанияһында ярты йыл эшләнем. Рәсәйгә ҡайтып, компания вәкиле булараҡ эшләү мөмкинлеге алдым.

Рәсәйҙәге компания Britain Education Support Services исеме аҫтында эшләй һәм беҙ бөгөнгө көндә Мәскәү студенттары менән әүҙем эш алып барабыҙ. Әлегә тик Англия менән генә тығыҙ бәйләнеш тотабыҙ, ләкин белем алыу мөмкинлеге биргән сит илдәр исемлеген арттырасаҡбыҙ. Был программа буйынса белем алған йәштәр Рәсәй һәм сит ил уҡыу йорто дипломдарына эйә буласаҡ. Башҡортостандың уҡыу йорттары студенттары ла оҙаҡламай был программаға йәлеп ителер, тип өмөтләнәм.

Сит илгә белем алырға барыуҙы тыуған ерҙән, илдән айырылыу, тип ҡарарға ярамай, сөнки сит илдә йәшәп ҡайтыу үҙебеҙ ҡалыплашҡан йәшәйештән бер аҙға арынып, башҡа төрлө тормошто күреү, сағыштырыу, һығымталар яһау мөмкинлеге бирә. Ғөмүмән, үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнау ҡыҙыҡһыныусанлыҡты, тирә-яҡты белергә, өйрәнергә тырышыуҙы юҡҡа сығарырға мөмкин, шуға күрә күберәк кеше менән аралашырға, төрлө өлкә менән ҡыҙыҡһынырға, ҙур ҡалаларға, сит илдәргә сәйәхәт ҡылырға ҡурҡырға ярамай. Ә мөмкинлек булһа, бер аҙ ситтә йәшәп ҡайтыуҙа бер хилафлыҡ та күрмәйем. "Йөрөгән таш шымара, ятҡан таш мүкләнә" тигәндәй, аралашыуҙар, башҡа мәҙәниәт, икенсе төрлө тормош менән танышыу үҫергә ыңғай импульс ҡына бирә, минеңсә. Ләкин ниндәй юлды һайлаһа ла, кеше үҙ тамырҙарын, тарихын онотмаҫҡа, әллә күпме сит тел өйрәнһә лә, туған телен хөрмәт итергә һәм барлыҡ эшмәкәрлеген киләсәктә тыуған еренә файҙа килтерерҙәй һөнәрҙәрҙе өйрәнеүгә бағышларға тейеш. Тормоштағы барлыҡ уңыштарың, ҡаҙаныштарың өсөн айырым кешегә түгел, ә халҡыңа бурыслы икәнебеҙҙе оноторға ярамай.

## Барыһы ла сағыштырыуҙа асыла

Бөгөн кешенең төрлө илдәр, ҡитғалар буйлап сәйәхәт итеү, сит яҡтарға уҡырға барыу йәки бер аҙ эшләп ҡайтыу мөмкинлеге ҙур һәм нәҡ ошондай сәфәрҙәр ваҡытында тыуған илдең ҡәҙере нығыраҡ беленә, туған телдең, туған халҡыңдың ни тиклем яҡын икәнлеге аңлашыла. Шулай уҡ төрлө илдәр араһындағы йәшәйеште сағыштырыу мөмкинлеге лә тыуа. Бер аҙ Англияла йәшәгәс, мин нәҡ ошо ил менән Рәсәй араһында бер ни тиклем сағыштырыуҙар яһай алам.

Бай тарихҡа эйә булыусы Англия, минеңсә, тәү сиратта донъя аренаһында үҙ-үҙен дәрәжәле тота белеүе менән айырылып тора. Ил үҙ йолаларын һәм закондарын ҡәтғи рәүештә үтәп йәшәүе менән көслө, тип әйтергә була. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: Англияла тәүге урынға кеше һәм уның мәнфәғәттәре ҡуйыла, йәғни власть кеше тирәләй әйләнә, ә беҙҙә - киреһенсә. Был бик күпте һөйләй һәм күпте хәл итә. Унда шулай уҡ, беҙҙән айырмалы рәүештә, уҡыуға, юғары сервис булдырыуға ҡараш бөтөнләй икенсе, һәм быларға ҙур иғтибар бүленә. Былдай ҡараш илдә төплө һәм юғары белемле кешеләрҙең күп булыуына килтерә, ә был, үҙ сиратында, илдең үҫешенә лә ыңғай йоғонто яһай. Белем илгә килем килтереүсе сығанаҡ булараҡ та ҙур роль уйнай, йәғни унда башҡа илдәрҙән уҡырға килеүселәр күп, тимәк, илгә өҫтәмә аҡса ла килә. Йәшәү кимәле лә күпкә юғары.

Шулай уҡ маҡсаттар ҙа юғары амбициялы була. Кешенең йәшәгән урыны ни тиклем ҙурыраҡ, уның маҡсаттары ла юғарыраҡ, мотивацияһы ла көслөрәк, тип әйтергә теләйем. Мин булған илдә йәштәр араһында конкурентлыҡ беҙгә ҡарағанда күпкә юғары, тимәк, йәштәр иртәрәк өлгөрөп етә. Уларҙа бәләкәй саҡтан уяулыҡ, сослоҡ тәрбиәләйҙәр һәм ошо сифаттарға эйә булмаһаң, тормоштағы иң һәйбәт урындар икенсе берәү тарафынан биләнәсәк, тигән фекерҙе һеңдереп үҫтерәләр. Шуға күрә улар беҙҙең йәштәргә ҡарағанда тиҙерәк өлгөрә, тормошҡа яраҡлаша, атай-әсәй ҡуйынынан да иртәрәк сығып китә һәм үҙаллы тормош башлай. Үҙаллы йәшәй башлағас та, улар йәмғиәттең айырым ячейкаһына әйләнә һәм атай-әсәйгә генә һалынып ятмай. Ә беҙҙә нисек? Күптәр мәктәпте тамамлай, әрме сафында хеҙмәт итеп ҡайта, юғары белемгә эйә була, кәләш ала, ә үҙе һаман да атай-әсәй ҡурсыуынан айырыла алмай. Әлбиттә, ғаилә ҡиммәттәренең көслө булыуы, бер яҡтан, ыңғай роль уйнай, сөнки кеше туғанлыҡ ептәре менән ҡеүәтле, ләкин үҙаллы тормош башлау йәһәтенән кире эҙемтәләргә килтереүе лә ихтимал. Иҡтисади йәһәттән, илдең үҫеше яғынан сит илдәгесә йәшәү моделе ыңғай булһа, рухи яҡтан ҡарағанда, һис шикһеҙ, беҙҙәге тормош күпкә артыҡ.

## Ололар һәм йәштәр мөнәсәбәте

Бөгөнгө көндә атайҙар һәм балалар мөнәсәбәттәренең проблемалары киҫкенләшеүен ғаилә миҫалында ғына түгел, ә йәмғиәттә булған мөнәсәбәттәрҙә лә асыҡ күрергә була. Мәҫәлән, йәштәргә эш урындары юҡ, тибеҙ, ә шул уҡ ваҡытта күптән пенсия йәшендә булғандар эш урынын биләүен дауам итә. Был күренеш шәхси бер кеше өсөн генә түгел, ә тотош ил өсөн үҙ ҡыйынлыҡтарын тыуҙыра. Беренсенән, үҙ һөнәре буйынса эш тапмаған йәш кеше башҡа тармаҡҡа китергә мәжбүр була һәм бернисә йыл үтеүгә ҙур көс һалып үҙләштергән һөнәренән "алыҫлаша", үҙ оҫталығын юғалта. Икенсенән, замана талаптарына яраҡлашырға өлгөрмәгән, һаман да элекке алымдарға таянып эшләгән ололар илдең иҡтисади үҫешенә тотҡарлыҡ яһай, тип әйтергә була.

Шул уҡ ваҡытта, эшләргә теләгән, тормошта үҙ урынын табырға ынтылған йәш кеше маҡсатына өлгәшеү юлын эҙләйәсәк. Шуға күрә йәштәрҙең, ололар эш урыны бирмәй, тигән һылтау менән эшһеҙ йөрөүе үҙенең йүнһеҙлеген аҡлау сәбәбе генә. Бында алтын урталыҡ табыу мөһим, минеңсә. Сөнки бөгөнгө йәштәр донъя кимәленән сығып фекерләй һәм масштаблы идеялар тәҡдим итә, амбициялары ла көслө, ә оло быуын кешеләре тәжрибә һәм һалҡын ҡанлылыҡ менән алдыра. Шулай уҡ йәштәрҙе бер аҙ йүгәнләп тороусылар ҙа булырға

Англияла үҙемдең йәштәштәрем тормошона ла күҙ һалдым һәм ошондай һығымталар эшләнем. Беҙҙә күпселек, шул иҫәптән йәштәр ҙә, ауылдарҙа йәшәй, ә ауылдағы тыныс һәм аҡрын темптағы тормош кешене лә һәлмәккә әйләндерә, маҡсаттар ҙа киң масштаблы булыуы менән айырылып тормай. Ә ҡалала иһә тиҙлек, теге йәки был ситуацияға ҡарап, тиҙ генә яраҡлаша белеү кеүек сифаттар ҙур роль уйнай, шу-

тейеш, сөнки улар ҡыҙыу ҡанлы, эҙемтәләрен уйламай, тотҡан ерҙән һындырырға ярата. Шуға күрә бер-береһен аңлап һәм хөрмәт итеп эшләү күпкә яҡшыраҡ.

## Бөгөн лидерҙар бармы?

Үҙ халҡының яҡты шәхесе булырҙай кешене тәрбиәләү ҡатмарлы һәм еңел булмаған эш. Кеше бала саҡтан үҙен ошо ерҙең хужаһы итеп тойһа, тыуған иле мәнфәғәтен тәүгә урынға ҡуйып йәшәргә өйрәнһә генә унан халҡын алға әйҙәрҙәй шәхес үҫергә мөмкин. Лидерлыҡ сифаттары кеше үҙе алдында торған яуаплылыҡты тойған, аңлаған осраҡта ғына үҫешә һәм нығына. Шул уҡ ваҡытта ул ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшеү өсөн үҙендә булған һәләттәр хаҡында айыҡ фекер йөрөтөргә бурыслы, сөнки барлыҡ уйҙар һәм маҡсаттар ҙа мөмкинлектәрең менән нығытылған булырға тейеш.

Бөгөнгө көндә лидер булырлыҡ кешеләр күп, ләкин уларға һәләттәрен тулы кимәлдә асыу өсөн төрлө кимәлдәге контроль көслә булыуы ҡамасаулай. Федераль үҙәк тарафынан төбәктәр алдына ҡуйылған бурыстар ниндәйҙер кимәлдә халыҡ мәнфәғәтен сикләй, хәл-ваҡиғаларҙы үҙ контролендә тотоу өсөн власть органдары лидерҙар эшмәкәрлеген дә көҙҙән яҙҙырмай. Ләкин күңелдәрендә кәрәк ваҡытта ялҡынға әйләнерлек осҡон йөрөтөүселәр байтаҡ икәненә иманым камил. Замана лидеры эш урынында үҙ бурысына яуаплы ҡараған абруйлы хеҙмәткәр, ул һәр ваҡыт белемен камиллаштыра, төрлө идеялар менән яна, пландар ҡора, тәжрибә туплай һәм, һис шикһеҙ, үҙ маҡсаттарына өлгәшә. Ысын лидер үҙ алдына мотлаҡ рәүештә башҡаларҙан айырылып торорға тигән маҡсат ҡуйып йәшәмәй. Шуға күрә, лидерҙар юҡ, тип фекер йөрөтөү, минеңсә, дөрөҫ түгел.

## Сәйәсәт - ҡатмарлы структура

Рәсәйҙәге сәйәсәттең ҡатмарлы структура булыуына ҡарамаҫтан, унда ылығыусылар йылдан-йыл арта ғына. Улар араһында оло быуын кешеләре менән бер рәттән йәштәрҙең дә күп булыуы ғәжәп күренеш. Ләкин сәйәсәт өлкәһендә үҙ урынын табыуға бары тик сыҙамлылар һәм маҡсатлылар ғына өлгәшергә мөмкин. Шулай уҡ һәр күренекле билдәле сәйәсмән - ул ифрат ҙур һәм күренмәгән айсбергтың бер осо ғына, уның артында уны уңышлы һәм билдәле итеүҙә ҙур роль уйнаусы көс тороуы, ә ул кеше бары тик тотош айсбергтың фекерен, идеяһын, уйын юғарыға илтеүсе өлөш кенә икәнлеге береһенә лә сер түгел. Һәм был айсберг ни тиклем ҙур һәм мөһабәт булһа, ул кешенең сәйәсәттәге урыны ла юғарыраҡ һәм ышаныслыраҡ. Ә кемдер бер ниндәй таяныслыҙ сәйәсәткә ынтыла икән, унда эләккән осраҡта ла, иртәмеһуңмы уны сәйәсәт аренаһынан алып ташлаясаҡтар, сөнки был көскә яңғыҙ ҡаршы тороу мөмкин түгел. Шул уҡ ваҡытта сәйәсәткә барырға теләүсе йәштәрҙе был юлдан дүндерергә тырышыусылар менән килешмәйем, сөнки, әйтеп үткәнемсә, халыҡ алдына сығарылған кандидаттар бары тик шул ҙур уйында ҡатнашыусы бәләкәй генә өлөш һәм ниндәй ҙә булһа сәйәси көстөң идеяһын йәмғиәткә сығарыусы ғына булып тора, ә һайлаусының теге йәки был кандидатҡа өҫтөнлөк биреүен уның артындағы сәйәси көскә өҫтөнлөк биреү, тип аңларға кәрәк.

## Эшҡыуарлыҡты үҫтереү - илде үҫтереү

Һуңғы ваҡытта Рәсәйҙә, шул иҫәптән республикала ла эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленә. Беҙҙең илдә эшҡыуарлыҡ баҙары тулмаған әле һәм был өлкәне үҫтереү өсөн барлыҡ мөмкинлектәр ҙә бар. Эшҡыуарлыҡты үҫтереү төбәккә, тәү сиратта, эш урындары булдырыу мөмкинлеге бирә. Был бик мөһим фактор, сөнки халыҡ эш менән тәьмин ителгәндә генә лайыҡлы тормош хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкин. Шулай уҡ ауыл хужалығында эшләргә теләүселәргә лә ярҙам күрһәтелеүе күпселек халҡы ауылда йәшәгән Рәсәй өсөн ҙур роль уйнай. Эшҡыуарлыҡты үҫтереү, тимәк, төбәк бюджетына һалымдарҙың да күберәк һәм мулыраҡ килеүенә булышлыҡ итә. Ә был, үҙ сиратында, төбәктең иктисади һәм социаль яҡтан үҫеүенә булышлыҡ итә. Тимәк, эшҡыуарлыҡты үҫтереү - ул төбәкте, илде үҫтереү, тигән һүҙ. Ҡайһы берәүҙәр үҙ эшен асыу өсөн кәртә итеп аҡса юҡлығын күрһәтә. Был, әлбиттә, мөһим, ләкин төп фактор түгел. Кешене ҡыҙыҡһындырырлыҡ, конкурентлыҡты йыйып сыға алырлыҡ шәп, һәйбәт идея булһа, финанс ресурстары табыласаҡ. Шуға күрә, аҡсаның алда, уңышлы эшҡыуар булыу маҡсатлылыҡ, тәүәккәллек, ҡыйыулыҡ, бизнес өлкәһенә яраҡлаша алырлыҡ сифаттарҙың булыуына барып тоташа. Шулай уҡ белемле булыу ҙа төп талаптарҙың береһе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө йәштәрҙә кемдер көсһөҙлөктә, ялҡаулыҡта, илтифатһыҙлыҡта ғәйепләһә, икенселәр уларҙың үҙ-үҙҙәренә булған ышаныстарына, белемгә ынтылыуҙарына һәм маҡсатлы булыуҙарына, үҙ фекерен ҡурҡмайынса әйтә алыуына һоҡлана һәм нәҡ ошондай йәштәрҙең ил терәге буласағына баҫым яһай. Үткәнден, бөгөнгөнөң һәм киләсәктең бер өлөшөн үҙҙәрендә туплаусы булараҡ, йәштәр өҫтөндә ҙур яуаплылыҡ ята һәм ышаныслы аҡлар өсөн нәҡ беҙҙең бөгөнгө әңгәмәсебеҙ кеүек улдар һәм ҡыҙҙар кәрәк тә инде.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ЭСМӘҺЕН, ТИҺӘҢ...

## баланың буш ваҡыты булмаһын

**Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, бөгөнгө көндә йәштәр өсөн рухи, матди ҡиммәттәр төшөнсәһе генә түгел, үҙ-үҙен кеше араһында нисек тотоу, тәрбиәлелек-тәрбиәһеҙлек төшөнсәләре лә яңы мәғәнә ала. Йәштәр "ярай" менән "ярамай" һүҙҙәренең сиген бөтөнләй күрмәй башланы кеүек. Был нимәнән килә? Тәү сиратта, ата-әсә тәрбиәһенән, тиер күптәр. Тимәк, бөгөн беҙ йәш быуынды тәрбиәләй белмәйбеҙме? Әлбиттә, сөнки ата-әсә үҙе ниндәй тәрбиә алған, балаһына ла шул ҡиммәттәрҙе һалырға тырыша. Тәрбиә бит өй эсендә, кеше араһында үҙеңде нисек тотоуҙан ғына ғибәрәт түгел, ә балаға рухи байлыҡ, мәңгелек байлыҡ төшөнсәләрен аңлатыу, уға башланғыс биреүҙә лә. Тик күпселек ата-әсә үҙе бөгөн был ҡиммәттәр ниҙән ғибәрәт, рухи байлыҡты нисек булдырырға икәнен төшөнөп етә алмай кеүек.**

Ә шулай ҙа тәрбиәле бала үҫтереү ауыр мәсьәләме? Был һорауға яуапты тәрбиәле бала ниндәй булырға тейеш икәнлеген асыҡлауҙан башлайыҡ.

Тәрбиәле бала, тәү сиратта, алкоголь, тәмәке кеүек зарарлы ғәҙәттәрҙән азат булырға, юғары белем алырға, табышлы эштә эшләргә, тырыш, итәғәтле булырға тейеш. Был сифаттарҙың тәүгеһе - зарарлы ғәҙәттәрҙән азат булыу иң мөһиме булһа ла, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ата-әсә тап ошо юҫыҡта битарафлыҡ күрһәтә йә был хәлгә ҡаршы нисек көрәшергә белмәй. Ни өсөн? Тиҫтерҙәремде оҙаҡ ҡына ваҡыт күҙәтеп, уларҙың зарарлы ғәҙәттәр йоғонтоһона бирелеүе сәбәбен һорашып йөрөй торғас, барыһының да яуабында "Ял минуттарын башҡа төрлө нисек үткәрергә була һуң?" тигән уртаҡ бер һорау, икеләнеү яңғыраны. Энергияны ташып торған, бер минут та тик ултырып сыҙай алмаған йәштәр ял ваҡытын да бушҡа уҙғарыуҙы үҙһенмәй шул. Тимәк, ата-әсәгә һау бала үҫтереү өсөн тап бына ошо мәсьәләгә иғтибар итергә кәрәк. Һәм, ысынлап та, спорт менән шөғөлләнгән, төрлө ижади түңәрәктәргә йөрөгән балалар алкоголь, тәмәке ҡулланыуҙы үҙ итмәй бит.

Балала ҡыҙыҡһыныуҙар күп. Ата-әсә был ҡыҙыҡһыныуҙарҙы файҙалы йүнәлешкә борорға, уларҙы контролдә тоторға, шарттар тыуҙырырға тейеш. Шарттар, тигәс тә, был баланың һәр теләген үтәп, шаштырыу тигәнде аңлатмай. Бала бала инде, теләктәре күп булыр, әммә артабан уның да күңеленә ятырҙай, ата-әсәһенең дә хыялдары менән тап килгән, матди яҡтан унайлы булған, көсөгөҙҙән килмәгән сығымдар талап итмәгән теләген тормошҡа ашырырға ярҙам итергә мөмкин бит? Әлбиттә, мөмкин. Тимәк, үҫеп еткәс, алкоголь, тәмәке ҡулланып, төнгө клубтарҙан ҡайтышмай йөрөгән бала үҫтерергә теләмәйһегеҙ икән, уның ике ҡулын кеҫәһенә тығып буш йөрөүен ташлатығыҙ. Әйҙә, форсат килеп тыуған һайын күңеленә хуш килгән шөғөл менән булышһын. Бынан тыш, йәш кешегә абруй төшөнсәһенең асылы иптәштәре алдында бер рюмка араҡы күтәреп эсә белеүҙә түгел, ә сәләмәт булыуҙа икәнлеген төшөндөрөү ҙә ҡамасауламаҫ. Сөнки һәр баланың тиҫтерҙәре алдында бер башҡа юғары тороу теләге бар. Ә һеҙ балағыҙға был өҫтөнлөк сәләмәт тормошта һәм зарарлы ғәҙәттәрҙән азат булыуҙа икәнлеген төшөндөрөгөҙ.

**Ә шулай ҙа, ни өсөн ҡулыңа һыра, тәмәке алаһың һуң һин, йәш кеше? Ошо һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ әле.**

**Лилиә, студент:** Барыһы ла эсә, тарта, йәмғиәт ниндәй, кешеләре лә шундай инде. Йәмғиәттән айырылып, аҡ ҡарға булып йөрөп тә булмай. Унан һуң, йәмғиәтебеҙҙә йәш быуынға өлгө булырҙай кешеләр һирәк, тип уйлайым. Бөтөнләй үк юҡтар, тимәйем, сөнки минең атайым һәм әсәйем эсмәй, тәмәке лә тартмай. Мин дә алкоголле эсемлектәрҙе йыш булһа ла сама менән генә ҡулланырға тырышам, аягымда тора алмаҫлыҡ булып эсеп йөрөгәнем юҡ. Тәрбиәгә килгәндә, бер генә әсә лә балаһының насар ғәҙәттәргә бирелеүен теләмәй, әлбиттә. Минең әсәйем дә эсеүем хаҡында белмәй, ауылда саҡта бөтөнләй эсмәҫкә тырышам. Тик ата-әсә өлгөһө генә етмәй, тип уйлайым. Сөнки күп осраҡта, бигерәк тә үҫмер саҡта, балалар бөтөнләй ата-әсәһен һанға һуҡмай, тыңламай башлай. Ситтән үҙенә кумирҙар эҙләй. Быны шул кумирҙар эсмәҫкә һәм тартмаҫҡа тейеш тә түгел инде. Йәштәр күберәк йырсылар, актерҙар, йә башҡа өлкәләге шәхестәрҙе кумир итеп һайлай. Әммә уларҙың күбеһе сәләмәт йәшәү өлгөһө күрһәтмәй бит. Телевизор тоҡандыраһыңмы, радио тыңлайһыңмы, гәзит биттәрен асаһыңмы, интернет селтәрендә ултыраһыңмы - бар ерҙә шул "кумирҙарҙың" ниндәй аламалыҡтар ҡылыуы хаҡында ишетергә, күрергә, уҡырға мөмкин. Шунан ниндәй матур ғәҙәттәр хаҡында һүҙ булырға мөмкин? Бөгөн йәштәр өсөн "табу" төшөнсәһе бөтөнләй юҡ, нимә теләйһең, шул асыҡ, тигәндәй. Әхлаҡлы кеше тәрбиәләү өсөн тәү сиратта кумир һәм идеалдар образын үҙгәртергә кәрәктер, бәлки?..

**Илшат, студент:** Был бик ауыр һорау, сөнки мин уға нисек яуап бирергә лә белмәйем. Моғайын да, былай ғына эсәм, тип яуап бирермен ул. Эйе, былай ғына, бер сәбәпһеҙ, ҡасан теләйем, шул ваҡытта дуҫтарым менән йыйылышып, алкоголле эсемлектәр эсәбеҙ. Бының өсөн сәбәптәр ҙә кәрәкмәй. Юғары уҡыу йортонда белем алам, уҡыуы ауыр. Һәм аҙна аҙағы етеү менән дәрестәрҙән әҙерәк ял итеп, күңел асып алыу өсөн берәй төнгө клубҡа, йә кафеға инеп ултырабыҙ. Минеңсә, бында бер насарлыҡ та юҡ. Атай-әсәйҙәр бер ваҡытта ла балаларын тулыһынса аңлап етмәй, йәштәр эсә-тарта тип ғәйепләйҙәр. Ә беҙ буш ваҡыттарҙы нисек үткәрәйек? Күңел асмай, дүрт стенала бикләнеп ултырыуҙан ни файҙа? Ярай, ултырҙыҡ та, ти, шунан? Китап уҡығы килмәй, гел телевизорға, компьютерға текәлеп ултырырға атай-әсәй үҙе үк рөхсәт итмәй, урамға сыҡһаң, буштан-бушҡа йөрөүҙән файҙа юҡ. Ә һыра йә араҡы эсеп дуҫтарың менән аралашһың, күңел асылып, эсең бушап ҡала...

**Гөлсөм, студент:** Ауылдан ҡалаға килгән ҡыҙҙар бар нәмәне лә татып ҡарарға теләй. Бер тапҡыр алкоголь тәмләгәндән һуң, кемдер был хатаһын башҡа ҡабатламаҫҡа үҙенә һүҙ бирә, кемдер, киреһенсә, хатаһын ғәҙәткә әйләндерә. Мин икенселәр рәтенә инәм, эсәм һәм һирәк-һаяҡ тәмәке лә тартып алам. Был кәрәкмәгән алама ғәҙәттәремде мин тап шул бар нәмәне лә татып ҡарағым килгәнлектән булдырҙым. Атай-әсәйем мине һәр яҡлап контролдә тотто, әсәйем әле лә ауылға ҡайтҡанымда хатта кискеһен дуҫтарым янына сығыуҙы ла тыя. Һәм мин баш ҡалаға уҡырға килгәс тә үҙемде азат кеше итеп тойҙом, минең артымдан ҡарап, киҫәтеп, ҡолаҡ итемде ашап тороусы кеше булмауы шатландырҙы. Бәйҙән ысҡынған эт кеүек, тиҙәр бит әле, был һүҙҙәр шул осорҙа минә бик тап килер ине. Ә шулай ҙа, эскән-тарткан ҡыҙҙарға ошондай насар ғәҙәттәре булмаған егет кеше кәрәктер, тип уйлайым. Сөнки минең һөйгәнем эсмәй ҙә, тартмай ҙа, мине лә ошоға өндәй. Эсеүҙе ташла, ти. Ул, әлбиттә, минең тәмәке тартыуымды белмәй, белеп ҡалһа, ни булырын күҙ алдыма ла килтерә алмайым. Урамда тәмәке тартып торған ҡыҙҙарҙы осратһа, ене ҡуҙғала. Шунлыҡтан, минең кеүек ҡыҙҙарға ҡаты ҡуллы ир-егет кәрәктер ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына шундай һөйләшеүҙәргә саҡыра алдым үҙем аралашып йөрөгән иптәштәремдең бер нисәһен. Уларҙың үҙҙәре тураһында һөйләүе һеҙҙе лә тетрәндергәндер, хөрмәтле ата-әсә, шулаймы? Юҡ, минең балам былар һымаҡ түгел, тигән һығымта ла яһағанһығыҙҙыр. Кем белә бит. Нисек кенә булмаһын, "Алма ағасынан алыҫ төшмәй" ти халыҡ аҡылы. Балағыҙға үҙегеҙ ниндәй тәрбиә бирәһегеҙ икәнен иҫтән сығармаҫҡа кәрәктер шулай ҙа...**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

Лариса АБДУЛЛИНА

# МИҢЛЕ БУРАНҒОЛ

(Хикәйә)






Ғүмер буйы заводта инженер булып эшләгән Буранғолдың пенсияға сығыр алдынан ғына ҡулындағы миңе үҙен белгертә башланы. Бер эштән дә тартынып тормаған ир башта быға иғтибар итмәҫкә тырышты. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡулындағы таптың барлығын да онотҡайны. Беләгенә тыш яҡлап ятҡан йомарланған йоҙроҡто хәтерләткән был көрән тамға үҙен белә-белгәндән бирле бар һәм һис ҡасан борсоғаны юҡ. Миңме - мин: ҡысытмай ҙа, һыҙламай ҙа, йыл миҙгелдәренең үҙгәреше лә тәьҫир итмәй. Итмәй ине...

Бер көндө Буранғол йоҡонан уянып, миңенең төҫө үҙгәреүенә иғтибар итте. Эшенән һуңлатып ҡына ҡайтҡайны, бәлки, күҙҙәр арығандыр, шулай күренәләр, тип уйлап та өлгөрмәне, йыуыныу бүлмәһенә килеп ингән ҡатыны ҡысҡырып ебәрҙе.

-Атаҡ-атаҡ ! Был нимә тағы? Кислотаға бешеп ҡайттыңмы әллә?

-Юҡсы, - тиеүҙән башҡа бер ни ҡалманы. - Иртәнән кеше ҡулын тикшергәнсе, эшең менән бул, - тип өҫтәп ҡуйҙы. Әммә эсендә ниндәйҙер шомло тойғо яралғандай итте: берәй насар сир булып ҡуймаһын тағы.

Көн артынан көндәр үтә торҙо, тик ҡулдағы миң торған һайын ҡыҙарғандан-ҡыҙарҙы. Ә бер көндө хатта унан ҡан килеп сыҡты. Инде ҡасандан бирле, бар балнисҡа, тип тылҡыған ҡатыны алтмышты ҡыуам тип торманы, иларға керешеп киттесе:

-Ғүмер буйы һин үҙеңде генә уйланың... Гел һиненсә йәшәнек. Хәҙер инде балаларҙы башлы-күҙле иткәс, мине ташлап китергә йыйындыңмы?..

Тик Буранғол ғына нишләргә белмәне. Ул үҙен, әйтерһең, уйлауҙан, һөйләшеүҙән мәхрүм ителгән кеше кеүек тотто. Ярар, балнисҡа барҙы ла ти, унда нимә тип әйтһендәр инде? Хәҙер бит донъя тулған һатып алынған дипломлы белгестәр менән. Ундай юл менән һатыусы булып эшләргә була, ә бына ни йөрәктәре менән кеше һаулығы һағына баҫалар икән, тип әсенгәне бар Буранғолдоң.

-Берәй үлән төнәтмәһе юҡмы шунда? - тине ул, ҡулдарын һелтәп, оҙон-оҙаҡ ниҙер һөйләгән ҡатыны тынып ҡалғанын шәйләгәс.

-Шуны әйтәм дә һуң, Буранғол. Һис булмаһа, тоҙ күленән алып ҡайтҡан һыу менән сайҡап ҡарайһыңмы әллә? Зыяны теймәҫ ине әле...

Ҡатыны балкондан алып ингән һыу менән миңен ниңә сайҡаған көнгә төштө ир: ҡулы әле ҡысытты, әле әрнеп һыҙланы, ә ҡыҙыл тап хатта шешкән һымаҡ тойолдо уға. Был көндө Гөлбикә уның күҙенә салынмаҫҡа тырышты. Ул, ваҡытты бушҡа әрәм итмәйем әле, тип, мәсеткә сығып йүгерҙе. Тереһыу тапҡан кешеләй ҡайтып ингән ҡатынын күргәс, башта Буранғол ҡыуанғайны, сәбәләнеүсән булһа ла, хәстәрлекле икәнен яҡшы белә ул уның. Тик өшкөрөлгән тоҙ алып ҡайттым, тигәнен ишетеп, ныҡ йәне көйгәндә әйтелә торған һүҙен ысҡындырмай булдыра алманы: сепрәк баш! Бер тапҡыр тоҙло нәмә менән булышты бит инде, нимә тип алып ҡайтты икән инде уны?

-Муллаға бөтәһен дә һөйләп бирҙем, ул шулай кәрәк, тине. Һиңә ярҙам итәйем тип йөрөгән баш, ә һин ҡысҡырынаһың, - ҡатын, әҙгәләнеп, иренә ҡараны. Һуҡранғанды бөтөнләй яратмай Буранғол. Тамам йәне көйөп, тышҡа сығып китте.

Бәй, бәй, был ни хәл? Һис ҡамасауламаған, хатта барлығы ла беленмәгән миңдең әле килеп көндән-көн боҙолоуы ғәжәпләндерҙе генә түгел, тамам хафаға һалды уны. Былай булмай, берәй сара күрергә кәрәк. Ғүмергә балнис юлында йөрөмәгән, ауырыу-һыҙлауҙың ни икәнен дә белмәгән кешене был хәл тамам көрсөккә терәне. Миңе көндән-көн боҙола, бер ниндәй төнәтмә лә, май-крем да ярҙам итмәй. Иртәгә заводтың табибына күренергә кәрәк булыр, моғайын. Өлкән йәштәге ҡатын ул, дөрөҫ кәңәш бирә белер әле, тигән ҡарарға килде.

Табибәнән башы түбән әйләнеп килеп сыҡты Буранғол: тиҙ арала район поликлиникаһына мөрәжәғәт итергә ҡушып, йүнәлтмә бирҙеләр. Яман шешкә әйләнеп ҡуймаһын, тип ҡурҡытты бит әле табиптың эргәһендә ултырған шәфҡәт туташы. Бына һиңә - мә! Ауыртмаған башҡа тимер таяҡ, тигәндәре ошомо икән? Былай нәҫелдәрендә ундай-бындай сир менән яфаланғандар юҡ-юҡлыҡҡа, әммә ғүмер буйы заводта эшләүен иҫәпкә алғанда, кем белә, етмәһә, һуңғы йылдарҙа, экология, тип саң ҡағалар... Ҡуй инде. Нимә генә булып бөтөр икән? Бәлки, әлегә хафаланырлыҡ урын да юҡтыр. Ана бит тәжрибәле табип Асия Фәнүз ҡыҙы үҙен бик тыныс тотто, етмәһә, район поликлиникаһына күренгәндән һуң яңынан үҙенә килеп китеүен һораны. Теләһә ниндәй сәбәп табып, үҙен йыуатырға тырышыуын аңлай ине Буранғол. Ярар, ни булһа ла булыр, Хоҙай ҡушмаған эш булмаҫ, тип йүнәлтмәләрен тотоп ҡайтып китте.

Өйҙә дүрт күҙ менән көтөп торған ҡатыны подъезға уҡ ҡаршы сыҡҡан.

-Йә, нимә тип әйттеләр? Дауаханаға ятырға ҡушманылармы? Ҡушҡандарҙыр инде ул? Бынау хәтлем хәлгә аптырап ҡалғандарҙыр әле? Ҡатыны һорау биреп, яуабын да үҙе табырға тырышҡандай тотто үҙен. Фатирға килеп инмәйенсә Буранғол бер ни өндәшмәне. Ир йүнәлтмәләрен күрһәткәс, Гөлбикә өҙмәне лә ҡуйманы, әйҙә, хәҙер үк барайыҡ, бындайында сират ҙур булһа, түләүләһенә инәйек, бәлки, ваҡытты һуҙырға ярамайҙыр, тине ул. Һуңғы һүҙҙе ишеткәс, Буранғол уйға ҡалды. Ысынлап, бәлки, оҙон-оҙаҡҡа һуҙырға ярамайҙыр. Донъя хәлен кем белә, ана, күрше цехта бер ир эсем яна, эсем яна, тип йөрөгән, әммә табиптарға күренмәгән. Тамам ауыр хәлдә дауаханаға илткәндә эш үткән булған: ашҡаҙанында яман шеш тапҡандар. Меҫкенең ярты йыл эсендә ер ҡуйынына инеп ятты. Буранғолдың ҡатыны үҙен бик тәүәккәл тотто. Улар көрһөнә-көрһөнә поликлиникаға барып ингәндә, һыу буйы сиратта кем кемдең артынан булыуы хаҡында ҡыҙыу бәхәс бара ине. Көтөп торманылар. Ә инде түләүлеһендә күңелде тынысландырырлыҡ хәбәр әйтмәнеләр: әле еүешләнеп, әле ҡанһырап торған миң берәүгә лә оҡшап етмәне генә түгел, киреһенсә, тиҙ арала онкология үҙәгенә мөрәжәғәт итергә ҡуштылар.

Ҡатын эштең етди төҫ алыуын күреп, ирен тынысландырырға булып китте. Уй, Аллам, эй, яратмай уның ошо холҡон Буранғол: табылған бит бер ҡайғы уртаҡлашыусы. Берәй көтөлмәгән хәлгә тарыһаң, Гөлбикәне генә саҡыр инде: хәҙер анализ да бирә, кешеһен дә таба, барыһын көйләй, бөтәһен тынысландыра башлай.

Онкология үҙәге... Был һүҙбәйләнеш улар өсөн аяҙ көндә йәшен һуҡҡан һымаҡ яңғыраны. Буранғолдо тереләй ерләп ҡуйҙылармы ни! Унда берәүҙәр мөрәжәғәт иткән, икенселәр дауаханаһында ята, өсөнсөгә операция эшләгәндәр һәм башҡаларҙы ишеткәне бар барлығын. Тик үҙенә ҡағылмағас... Унда теләһә кемде ебәреүҙәре ихтимал, тик уны түгел кеүек ине. Хәйер, ғөмүмән, ул хаҡта уйлап ҡараған булдымы икән? Астың хәлен туҡ белмәй, тигәндәй, күршеһе яман шештән вафат булды, ә Буранғол уның ни сәбәпле, нисек ул хәлгә тарыуын белешеп тә торманы. Төбөнә тоҙ ҡоймайым тиһә лә, ҡайғыларын уртаҡлашып, аҡса биреүен бирҙеләр, ә бына ҡатыны, балалары менән һөйләшеп ултырырға ваҡыт тапманы... Тапманы, тип, ваҡыт тапты ул, нисектер төпсөнгән кеше һымаҡ күренергә теләмәне. Үҙеңдең өҫтөңә бәлә ишелмәйенсә, кеше хәлен аңлайһыңмы ни инде!..

Башта Буранғол эшенән һорап китеп, өйөндә үҙен онкоүҙәккә әҙерләне. Иртән тороп, Малаховтың Үҙәк каналдарҙың береһендә барған һаулыҡ тураһындағы тапшырыуҙарын ҡараны, тире ауырыуҙары хаҡында белешмәләргә күҙ һалды, әммә береһендә лә миңдәрҙе ентекле өйрәнгән мәҡәлә тапманы. Һүҙ ыңғайында ғына фекер әйтелә, тик ауырыуға тәғәйен анализ биреү юҡ. Әҙерлек өсөн был ваҡыт ҡына уға етмәй булып сыҡты. Етмәһә, Асия Фәнүз ҡыҙы көн дә тиерлек шылтыратып, "хәл" һорашып тора. Буранғол больничный алды. Әммә оҙайтырға барған һайын яраһына тоҙ һалып ҡайтарҙылар. Ошо рәүешле йөрөй торғас, сираттағы отпуск көндәре лә үтеп китте. Ә миң әллә ниндәй зәңгәрһыу төҫтәргә инеп, шешкәндән шеште. Мин үлергә әҙер, тигәнгә тиң күрҙе онкоүҙәккә барырға риза булыуын Буранғол. Әммә нишләмәк кәрәк... Етмәһә, Гөлбикәһенең күҙенән йәш китмәне. Ярар, ни булһа ла булды, тип, дауаханаға юлланды улар.

Бәй, бында ла һыу буйы сират икән дә баһа! Был хәтлем халыҡ ҡайҙан йыйылған һуң, тип һорап та өлгөрмәне ҡатыны, шунда уҡ яуабы ла ишетелде: бөтә республиканан, күрше төбәктәрҙән инде. Бөгөн табипҡа эләкмәйәсәктәре көн кеүек асыҡ ине. Бер яҡтан, Буранғол быға ҡыуанып та ҡуйҙы, бында аяҡ баҫыуҙы "үҙләштерергә" ваҡыт кәрәк әле. Ҡатыны ул арала төрлө таныштарына шылтыратты, үҙҙәренә кәрәклекте белдермәй генә ярҙам һораны. Хәйер, июнь башында кемде тота алаһың инде: күпселек халыҡ ялда, баҡсала... Сиратты көтөргә тура килде.

Уның ҡарауы, Буранғол бында бик күп яңылыҡ ишетте. Баҡтиһән, Рәсәй халҡының 37 проценты яман шештән үлә икән! Әлбиттә, араларында ирҙәр күберәк. Миңдәр тураһында күпме генә һорашып ҡарамаһын, сираты етеп килгән бик мәғлүмәтле йыуан ҡатын да кәрәкле генә һүҙ әйтә алманы. Һуңғы һөйләмен бөтөнләй теленән сығармаһа ла була ине: "Беҙҙең күршенең ҡыҙыл миңенә ошонда операция эшләгәйнеләр, бер ай ҙа торманы, меҫкенең. Миңдәрҙе киҫергә ярамай ҙа инде". Тынысландырҙы... Бына һиңә диагноз! Гөлбикәһенең был ҡатынға йәне көйҙө, саҡ талашып китмәнеләр.

Биопсия, анализдар, рентген барыһы ла Буранғолдоң файҙаһына түгел ине. Табиптар уның миңен күреп, тамам аптырашҡа ҡалды. Хатта иң тәжрибәлеһе лә нимә тип әйтергә, ниндәй диагноз ҡуйырға белмәне. Бөтәһе лә бер фекергә килде: миң тотош организмға зыян килтереүе ихтимал, шуға күрә мөмкин тиклем тиҙ арала унан арынырға кәрәк. Берәүҙәр - лазер, икенселәр химия ысулы, өсөнсөләр тәнгә таралмаҫ борон, бәлки, ҡулды киҫеү кәрәктер, тигән тәҡдим дә индерҙе. Тик бер өлкән йәштәге табип ҡына барыһына ла ҡаршы сыҡты: ҙурыраҡ ҡалаларҙағы клиникаларға барырға кәрәк, уларҙа медицина ҡорамалдары алдынғыраҡ технологияларға нигеҙләнгән, бәлки, аллергия ғыналыр, тине ул һүҙен тамамлап.

Ул арала Гөлбикә реклама гәзитенән бер иғлан табып, шунда барып киләйекме әллә, тине иренә. Аптыраған өйрәк күлгә арты менән сума, тигәндәй, нишләргә белмәгән Буранғол теләр-теләмәҫ кенә ризалашҡандай итте. Ә үҙенең имсе-томсо юлында һис йөрөгәне килмәй. Хәҙер күптәр үҙен халыҡ табибы тип иғлан итеп, аҡса һуҡҡанын яҡшы белә ул, әммә нимәләр эшләргә кәрәк ине. Ярар, күңеле ятмаһа, сығыр ҙа китер. Етмәһә, ҡатыны әйтеүенә ҡарағанда, уларҙың заводының бухгалтеры улының бүҫерен шул марый Амалияла дауалатып алған икән. Уныһын ҡайҙан ишеттең, тип торманы Буранғол. Бәлки, бухгалтер ҡатын үҙе тәҡдим итеп шылтыраткандыр әле, сөнки заводта бөтәһе булмаһа ла, күптәр Ҡаранаевтарҙың ниндәй бәләгә тарыуын беләләр. Буранғол бындай һығымтаға һуңғы арала хәл белешеүҙәр йышайып киткәндән һуң килде.

Имсе ҡатын оҙон-оҙаҡ һөйләп баш ҡатырып торманы, бары тик быуын-быуындан килгән сир булыуын һәм тиҙ арала һис көтөлмәгән һөҙөмтә биреүен генә әйтте. Улай булмаһын өсөн нимә эшләргә тейеш икән инде Буранғол? Һеҙгә бер нимә лә ярҙам итә алмаясаҡ, был һеҙҙең күрәсәк, тыуған яғығыҙға ҡайтығыҙ, бәлки, файҙаһы булыр, тине ул оҙатҡанда. Бына, исмаһам, ҡыуандырҙы! Юл буйына ҡатыны менән һөйләшмәй ҡайтты Буранғол. Ул тәҡдим итә тип, нишләп имсегә китеп барҙы икән? Артыҡ хәбәр эсте бошора, тигәндәй, теләһә кемде тыңлап йөрөргә берәй малай-шалайҙыр шул ул! Ҡатынының да ихлас ярҙам итергә тороуын аңлай, әммә теләһә ниндәй эсте бошорорлоҡ һүҙҙәргә әҙер булмай сыҡты уның күңел торошо.

Ҡарт табиптың кәңәшен тотоп, инде белгертмәйем тигән балаларына ла хәбәр итеп, Ҡаранаевтар Екатеринбургҡа юлланды. Ҡыҙҙарының бергә уҡыған әхирәте ошо ҡалала ине, табиптарға күренергә ярҙам итер әле, тип өмөт итте ир менән ҡатын. Тик ни тиклем генә тырышһалар ҙа, бында килеүҙәренә алты көн тигәндә генә ҡабул иттеләр Буранғолды. Ул арала миң бөтөнләй эренләп, еҫләнеп китте. Профессор бик

итәғәтле кеше булып сыҡты: "Ваҡытты һуҙып тормағыҙ, Мәскәүгә йәки Питерға барығыҙ, беҙҙә берәү ҙә дөрөҫ диагноз ҡуя алмаҫ, баш ҡалаларҙа аппаратура көслөрәк, әгәр теләһәгеҙ, таныш табиптарҙың телефонын да бирә алам, ғәфү итегеҙ, башҡаса бер нисек тә ярҙам итә алмайым, шуныһы көн кеүек асыҡ - миндән арынырға кәрәк", - тине ул.

Миндән арынырға кәрәк, тигәненә тамам аптыраны Буранғол. Әсәһе, киреһенсә, бала саҡтан миңгә ҡағылырға ярамай, ул Хоҙай билдәһе, ти торғайны. Бына һиңә аптыраш! Туҡтале, туҡта! Һун уларҙың нәҫелендә бындай миңләр бар ҙа инде, улар нисек йәшәп ята икән? Ошо мәлдә Буранғол ике-өс кенә түгел, хатта бер туғандары менән күптән күрешкәне, һөйләшкәне юҡлығын иҫенә төшөрҙө. Оят булһа ла бөгөн үк апаһына шылтыратып, хәлен белергә кәрәк. Яҙ көнө төшөнә лә ингәйне әле.

Оҙаҡ һөйләштеләр апаһы менән. Күбергә өлкән кеше гәрәлдәне. Баҡтиһәң, операциялар үткәргән икән. Мин дә ауырып торам, тип әйтергә теле әйләнмәне Буранғолдоң. Бары тик, апай, теге миңең нисек, тип һорап алды. Нисек булһын, ҡасан юғалғанын да белмәй ҡалдым мин уның, тине. Минеке әллә нишләп һыҙлап торған кеүек әле, тигән булды Буранғол. Ана, ауылға ҡайт та шишмә һыуы менән сайҡа, бер ни ҡалмаҫ, тип көлгән булды апаһы. Бәлки, ысынлап та, тыуған яғына ҡайтып урарғалыр, күптән ата-әсәһенең ҡәберенә лә зыярат ҡылғаны юҡ. Буранғолды уйҙарынан ҡатынының: "Баҡсаны һатып алыусы таптым, ике көндән Мәскәүгә юлланырбыҙ", - тигән хәбәре бүлдерҙе. Гөлбикәһе, әйтерһең, тап ошо хәл өсөн йәшәгән, тамам асылып китте: ул табиптар эҙләй, баҡса һата, билеттарға заказ бирә... Буранғол ғына үҙ йәненә урын тапманы. Нимә булды һуң был ҡулдағы тап менән?

Мәскәүҙә лә, Питерҙа ла бер үк хәбәр яңғыраны: тиҙ арала ҡулды киҫергә кәрәк, сөнки был миң организмды зарарлай. Һирәк осрай торған сиргә диагноз ҡуйыусы ла табылған: родогор. "Минең практикамда һеҙ өсөнсө кеше, - тине академик Зеленович, - тәүге икәүһе Ҡаф тауы яғынан килгәйне. Береһе уҙған быуаттың туҡһанынсы йылдар уртаһында, икенсеһе теүәл туғыҙ йыл үткәс мөрәжәғәт итте. Шул уҡ хәл. Тап һеҙҙең кеүек бәләгә тарығандар. Тауҙа, тау буйында йәшәгән халыҡтарҙа ғына була был сир. Шуға ауырыуҙың атамаһы ла "родогор". Миндән ҡотолорға кәрәк, ул организмды зарарлай. Миненсә, уны яндырыу (прижигание) мөһим, сөнки ҡулды киҫеү мәсьәләне ыңғай хәл итергә ярҙамлашыр, тип өмөт итеп булмай. Ҡулдағы был тап шунын менән ҡурҡыныс - уның тотош организмға таралыуы бар. Ә был инде, үҙ сиратында, фажиғәгә алып килә. Тәндең өлөштәрен юғалтмайынса ла миндән ҡотолорға мөмкин бит, иптәш Белявский", - тине ул ассистентына ҡарап, ҡеүәтләү көткәндәй. Ҡаф тауҙан килеүселәрҙең яҙмышы менән ҡыҙыҡһынғас, Буранғолдоң кикерәге шәлпәйеп төшә яҙҙы. Тәүгеһе миңен яндырған ваҡытта уҡ яҡты донъя менән хушлашҡан, икенсеһе тәүгеһенең хәле нимә менән тамамланғанын белгәс, ҡанһыраған миңе менән кире ҡайтып китҡән. Хәҙер технологиялар үҫеште, һеҙгә уныш йылмайыр, тип уйлайбыҙ, тиһәләр ҙә, Буранғол минен яндырыуға риза булманы. Унан бигерәк ҡатыны ҡаршы сыҡты.

Өфөгә ҡайтып төшөүен төштәләр, әммә бында ла уларҙы билдәһеҙлек көтә ине. Нимә эшләргә белмәй ултырғанда, улдары шылтыратты. Баҡтиһәң, Австрия клиникаларының береһендә тап миндәрҙе, сөйәлдәрҙе өйрәнеүсе ғалим бар икән, ул атаһына шунда мөрәжәғәт итеп ҡарарға кәңәш итте. Тик үҙ ғүмерендә сит илгә сығыу түгел, ул хаҡта уйлап та ҡарамаған Буранғол бер ни тиклем баҙап ҡалды. Хатта Гөлбикә лә ҡаушаңҡыраған төҫлө булды. Улар нимә әйтһен инде, бында, үҙ иләндә, үҙ ерендә диагноз ҡуя алмағанды... Тик Сурағол ныҡышмалы булып сыҡты. Үҙ ғүмерҙәрендә балалары иңенә бәләләрен һалмаған, һәр мәсьәләне үҙ-ара кәңәшләшеп хәл итеп өйрәнгән Буранғол менән Гөлбикә улдарының тәҡдименә башта ғәжәпләнде. Күңелдәре лә тулып китте...

-Атай, иҫләйһеңме, техникумда уҡығанда осрашыуға менсе студенттары килгәйне. Береһен мин үҙебеҙгә ҡунаҡҡа алып ҡайтҡайным. Ике йыл элек шул егетте интернеттағы социаль селтәр аша табып алғайным. Уға һинең сирең тураһында әйтһәм, Европа дауаханаларында мөмкинлектәр ҙурыраҡ, тип, бер клиниканың адреҫын бирҙе. Тик ҡабул итеү, дауалау ҡиммәт - илле мең доллар. Баҡсағыҙҙы, фатирҙы һатып булһа ла барырға тырышырға кәрәк, ҡулымдан килгәнсә мин дә ярҙам итермен, донъяла иң ҡәҙерлеһе - ғүмер! - тине ул. Тик Сурағол баҡса аҡсалары ярты йыл эсендә ил буйлап таралып бөткәнен белмәй ине шул. Улының хәстәрлекле мөнәсәбәтенән эсенә йылы йүгерҙе Буранғолдоң. Тышҡа күҙ һалды. Бәй, тамсы тама түгелме? Улар ҡатыны менән әле бер, әле икенсе табипҡа яҙылған, йөрөгән арала көҙ, ҡыш үтеп, яҙ етеп килә лабаһа. Ҡубырға әҙерләнгән ҡутыр шикелле ҡатҡан миңе һаман һыҙлай ине әле, әммә ул кәмемәне лә, ҙурайманы ла, әйтерһең, хужаһы менән бергә вәкиләрҙар ағышын күҙәтте.

Ҡайҙан тапһын инде ябай инженер, етмәһә, пенсиягә китергә йөрөгән ҡарт белгес ундай аҡсаны? Тик улы аптырап тормаған, интернет селтәренә ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән. Атаһының иҫәбенә бына аҡсалар яуа башламаһынмы! Кем - ун, икенсе берәү - илле, өсөнсөләр мең һум һалып булһа да, тотош Башҡортостан, күрше төбәктәрҙә йәшәүселәр ҙә ҡушылғас, йәйгә тиклем йыйҙы улар кәрәкле аҡсаны. Бына инде Австрияға юлланыр көн дә килеп етте. Бармаҫҡамы икән әллә, тип тә уйлағайны Буранғол. Анау хәтлем кешене борсоп, уйға һалып, үҙенсә итеп әйткәндә, кеше көлдөрөп йөрөгәһә килмәгәйне, әммә миңе лә ҡыҙыҡ итеп тота бит: әле һыҙлаҙан туҡтай, инде әжәлем шунандыр, күнәйем, тиһә, йөрәгенә төшеп һыҙлай, ҡан тама башлай. Ә бер көндө, тынысланайым, тип балыҡ тоторға сыҡҡанда, бер ҡарт менән танышып, күңеле лә күтәрелеп ҡайтҡандай итте. Уның ҡатынының бауырына сит илдә операция эшләгәндәр икән. Бик уңышлы үтте, әле һин дә мин донъя көтәбеҙ, тине бабай. Бына бит - Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң, кем белә, бәлки, Буранғолға ла уныш йылмайыр...

Яҡшы ҡаршыланылар сит илдә. Башта бер табип ҡараны, ғәжәпләнеүе йөҙөнә сыҡҡайны.Үҙ телендә кемдәр менәндер һөйләшеп алды, икенсе көнгә табиптар һаны өсәүгә етһә, өсөнсө көнгә тотош взвод булды, тиергә мөмкин ине. Тәржемәсенең һөйләгәндәрен тыңлап, Буранғол тамам йығылып китә яҙҙы.

-Һеҙ сирле түгел, һеҙ бик үҙенсәлекле ҡанлы кеше. Ундайҙар Рәсәйҙә күпме икән? Миңегеҙгә бөтөнләй ҡағылырға ярамай. Ул Хоҙай бүләге, генетик тамға! Ер шарындағы айырым ҡәүем вәкилдәрендә генә була был миң. Уны һаҡларға кәрәк. Хәҙерге көндә медицина бик алға китте, шуға күрә кешеләрҙең физиологияһы ғына түгел, рухиәте лә тәрән өйрәнелә. Әйткәндәй, боронғо замандарҙа ла шулай булған, әммә кешелек үҙенең үҫеш этабында был һәләтен юғалтҡан. Бөгөн рухи медицина янынан тергеҙелә. Һеҙ Ер шарының уникаль кешеһе, ер йөҙөндә рухи таҙалыҡты һаҡлаусыларҙың береһе. Әлеге мәлдә рухиәтегеҙ ҙур зыян күргән, шуға күрә миң ҡанай башлаған. Һеҙгә Ватанығыҙға ҡайтып, Ер кендегенә барырға кәрәк, иң ҙур тауығыҙға менегеҙ, иң таҙа шишмәнән һыу эсегеҙ, иң ҙур күлдә һыу инегеҙ, иң тар тарлауыҡтан үтегеҙ, иң саф урманға инегеҙ, иң тигеҙ далала таң ҡаршылағыҙ - ауырыуығыҙҙан бер ни ҙә ҡалмаҫ! Тик шуныһын онотмағыҙ: алған кисерештәрегеҙ хаҡында иң бәләкәй туғанығыҙға һөйләргә, ә иң ҡарт туғанығыҙҙың хәлен белергә онотмағыҙ! Клиника һеҙҙән аҡса алмай, ошо сумманы туған ерегеҙҙә изге урындарҙы һаҡлауға тотоноғоҙ! Насип итеп, беҙгә лә уларҙы күрергә яҙһын! Сәләмәтлек теләйбеҙ һеҙгә!

Буранғол табиптар янынан башы әйләнеп килеп сыҡты. Гөлбикәһе уның күҙенә ҡарап, илап ебәрҙе.

-Нимә булған? Хәлең шул тиклем насармы ни? Нишләп өндәшмәйһең?

-Гөлбикә, әле йәшәйбеҙ икән! Һинең кеүек ут борсаһе ҡатыны булған кеше ауырый тиме ни! - тине ир ҡатынын ҡосаҡлап, һәм миңе ҡанай башлағандан алып йыйылып йөрөгән йәштәренә ирек бирҙе.

Ҡатыны уның һүҙҙәренә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне, әммә аҡсаларын кире килтереп тотторғас, аптырашҡа ҡалды. "Ә ниңә Рәсәйҙә тик ҡулды ҡырҡыу, йә миңде яндырыу хаҡында һөйләнеләр икән, ә, Буранғол?" тигән булды ул самолетҡа ултырғанда. "Белмәйем, аңламайым", тиһә лә, уныһын Буранғол аңлай ҙа, аңламай ҙа ине...

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### Ой, Бадретдин, Юламан

Өфөлә 9-сы башҡорт интернат-мәктәбендә уҡыған саҡ. Һәр төрлө кисәләр йыш була. Бәхти Ғайсин менән Рафаэль Сафин ағайҙар аккордеонда һыҙҙыра. Бәҙретдинов менән Юламанов бейей, өс ҡатлы йорт һелкенеп тора. Интернат директоры тулы кәүҙәле Юзифа Матвеевна йәлп итеп тора ла: "Ой, Бадретдин, Юламан, ой, сапожки, ой, сапог", - тип, лап итеп ултыра төшә. Тәгәрәп көләбеҙ, бүлмәлә үҫекләп уйнайбыҙ. Әле лә "Байыҡ"ты ҡарағанда шуны иҫләп көләм. Директор итек табаны ҡубыуҙан ҡурҡҡан, ә егеттәр аяғы шаңғырыуҙы онотҡан. Матурлыҡ ҡорбанһыҙ булмай шул.

### Картуф "Һайыҫҡан" урамында уңа

Хәсбиямал инәйҙәр түбәнге оста йәшәне, өйҙә шыр малай - ашарға еткер генә. Йүнләп картуфы ла уңмай. Инәй бер мәл беҙҙең "һайыҫҡан" урамына күсергә булды, ситән өй, һарай эшләнде, күп итеп картуф та сәселде. Утау мәле етте - берәү ҙә сығып ҡул тыҡмай, алабута кеше оҙонлоҡ булды. Башҡаларҙың баҡсалары ал да гөл. Көҙ етте, картуф бармаҡ башындай, аҙ. Инәй зарлана: "Был урамда картуф шәп була, тигәндәре буш икән, кире үҙебеҙгә күсәйек", - ти. Тәрбиәләмәһән, бер урында ла бер нәмә лә үҫмәүен инәй онотҡан шулай. Уны әле лә "Һайыҫҡан" урамында ике төрлө картуф: береһе - эре, береһе - ваҡ, тип мәрәкәләйҙәр.

### Һәр кемгә йән йәлкә

Хәмирәләрҙең тышта мөгәрәбе бар - йәшелсә, картуф ҡышҡыһын яҡшы һаҡлана. Мөслимә бер көҙҙә ярты тоҡ сөгөлдөрөн шунда илтеп ҡуя. Яҙғыһын мөгәрәптә асһалар, ғәжәп, Хәмирәнең бер сөгөлдөрө ҡалмаған, Мөслимәнеке тоғо менән имен ултыра. Ҡомаҡтар үҙ хужаһының есен белгән, ә Мөслимәнең есен ят, ағыулы, тип уйлаған, күрәһең. Һәр кемгә лә йән йәлкә шул, шуны аңлап, әҙәм балаһы ла бөтә нәмәне йотмаһа ине лә бит, юҡ шул.

### Неврологҡа бар

Өй тулы кеше, бала-саға шаярғас, Биби инәйҙең башы ауыртып китә. "Ҡасан ҡайта был фетнәләр, әмәл юҡ, башым ҡаңғыра", - тип һөйләнә. Шунда 8 йәшлек Асия: "Һөйләнеп ваҡыт әрәм иткәнсе, неврологҡа бар һуң", - тип кәңәш бирә. Бер олоно, бер кесене тыңла, тип, инәй дауаханаға бара. Ә Асия кәңәше өсөн маһайып китә.

### Алкаш

Мәрхүм Сабирйән ағайҙар Мөслимәләргә ут күрше. Ағайыбыҙ йә он, йә сәй, йә картуф һорап йәҙәтә күршеһен. Бер көн тегенең инеп килгәнен күреп, Мөслимә эргәһенә шешә, рюмка ултырта ла, йоҡлап ятҡан була, йәнәһе, иҫерек. Ағай биҙрә тотоп, картуф теләнергә ингән икән. Юлы уңмағас: "Алкаш, бер яртыны эскән, үлмәһә ярай ине, мәскәй", - тип әрләп сығып китә. Ҡайһы саҡ хәйлә ярҙам итеп тә ҡуя шул.

### Эсеп ҡыуылдым шул

Мөслимә шаяртып һөйләргә оҫта, һәр кемде ышандыра. Малды күп көтҡәс, тәрбиәләү әмәлдәрен, ауырыуын дауалау сараларын да яҡшы белә. Ҡаршы күршеһе Фәхертдин ағай: "Күп беләһең, берәй ерҙә уҡыныңмы әллә?"- тип төбәшә. Мөслимә күҙ ҙә йоммай: "Техникум бөтөргәйнем, эштән эсеп ҡыуылдым шул", - тип яуаплай. Ағай: "Да, әрәм иткәнһең", - тип үкенә. Кешеләргә лә был турала һөйләй. Тел ни, өйөрөлтә генә был хәбәрҙе: "Мөслимә ветврач булған, эсеп, эште боҙған икән", - тип, мәрәкә ҡылалар. Уйындан уймаҡ сыға, тигәндәре ошо инде.

### Бабай ойой, ҡарға һыйлана

Бәҙерниса еңгә ҡаҙ себештәре һатып алған. Үҙе: "Кешенән ҡалмаҫҡа уйлап, әпикүнгә себештәр алдым әле", - тип көлә. Эш көнө бөткәнсе, бабайын себеш көтөргә ҡуша. Бабайы ни, эскәмйәлә ойоп тик ултыра, ә ҡарғаларға шул ғына кәрәк. Еңгәбеҙ сығыуға егерменән ун себеш ҡалған. Әбейенең тауышына бабай тертләп уяна. "Бер һоғоном да ашатмайым мин һинә, ойотко", - тип әбей туҙа.

Ҡарғалар "туйынан" һуң туҙҙың ни, туҙманың ни, эш уҙған.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# МАЙҺЫҘ ДИЕТА...

## файҙалы түгел, имеш

■ Тәүлегенә һигеҙ сәғәт йоҡлау - йәш булып ҡалыуҙың нигеҙе, тип белдерә ғалимдар. Улар иҫбатлауынса, даими рәүештә йоҡо туймау организмды ваҡытынан алда ҡартайыуға дусар итә, шулай уҡ йоҡо баш мейеһе эшмәкәрлеге өсөн дә мөһим. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, төнгө йоҡоноң ҡыҫҡа булыуы организмдың үтә мөһим функцияларының боҙолоуына һәм биологик үҙгәрештәргә килтерә. Йоҡо туймау матдәләр алышыныуы, гормональ һәм эндокрин системаһы процесының боҙолоуына алып килә. Тәжрибәлә ҡатнашыусы йәш егеттәр тәүлегенә 4 сәғәт кенә йоҡлай, һөҙөмтәлә уларҙың ҡанында глюкозаның, шулай уҡ стресс гормоны - кортизол артыуы һәм гормональ баланстың үҙгәреүе күҙәтелә. Эксперименттарҙа ҡатнашыусыларға 12 сәғәт йоҡлап алырға рөхсәт бирелгәндән һуң был симптомдар юҡҡа сыға.

■ Һуңғы ун йыл эсендә үткәрелгән тиҫтәләрсә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, майһыҙ диеталар сәләмәтлек өсөн зыян ғына килтерә. Бөгөн түбән калориялы аҙыҡ-түлек ҡулланыу модала һәм ул иң сәләмәт тукланыу өлгөһө итеп ҡабул ителә. Быньдай продукттар етештереүселәр вәғәҙәләүенсә, май күләме түбән булған аҙыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән, яман шеш һәм диабеттан һаҡлай. Әммә был аҙыҡ төрҙәре составындағы тоҙ, трансжир, зарарлы углеводтар берәүгә лә файҙа килтергәне юҡ әле. Сәләмәтлек өсөн майҙың күләменә ҡарағанда, уның сифаты күпкә мөһимерәк. Мәҫәлән, түбән калориялы икмәктә май күләме аҙ, тик аҡ он һәм шәкәр күп, шуға ла майһыҙ, әммә эшкәртелгән углеводтарҙан торған диета ауырлыҡтың артыуына, йөрәк сирҙәренә, 2-се типтағы диабетҡа килтерә, ти ғалимдар.

■ Британия Физиотерапия Йәмғиәтселеге эксперттары күптәрҙең офистан сыҡҡас та смартфон, планшет, ноутбук ҡулланып, эшен юлда һәм өйҙә эшләүенә хәүеф белдерә. Быньда хеҙмәт һөйөүселәрҙең умыртҡа бағанаһы зыян күреүендә генә түгел эш, заман технологиялары офис хеҙмәткәрҙәренә бөтөнләй ял итергә бирмәй икән. Ике меңдән ашыу хеҙмәткәр араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, был кешеләрҙең өстән ике өлөшө эш көнө тамамланғас та эшләүен дауам итә. "Тиҙ арала хәл итеү кәрәклеге булған эште өйгә алып ҡайтыу насар күренеш түгел, шулай ҙа һәр кис һайын эшләү ғәҙәте арҡала һәм муйында ауыртыуға, стресҡа килтерә", - тип комментарий бирә доктор Хелена Джонсон. "Кеше портатив ҡоролмалар ҡулланһа, умыртҡа бағанаһына тағы ла ныҡыраҡ зыян килә. Өйҙә эшләгән кеше иртәгәһенә офиста үҙенең эшен яҡшылап башҡара алмаясаҡ һәм, һөҙөмтәлә, эшен тағы ла өйгә алаcаҡ. Шуға ла кешеләр смартфондарын һүндерергә өйрәнергә тейеш", - тип белдерҙе ул ВВС-ҡа биргән интервьюһында.

■ Көнөнә 7 сынаяҡ сәй эсеү простата бизе яман шеше хәүефен 50 процентҡа арттыра. Глазго университеты ғалимдары оошондай сенсацион белдереү яһаған һәм сәй индустрияһы вәкилдәре араһында тауыш ҡуптарған. Британия ғалимдары иҫкәртеүенсә, күп сәй эскән ир-егеттәр простата бизе яман шешенә тиҙерәк бирешә. Ғалимдар был һығымтаға 4 йыл дауамында 6 мең ир-атты тикшергәндән һуң килгән.

ҮӘТ, БӘЛӘ!

**Бер мәртәбә мәк сәскәһенең күҙ йәштәрен тәмләп ҡараған кеше, ғүмер буйы илар… Был һүҙҙәр наркотик ҡулланыусылар һәм уларҙың ата-әсәләренә бик яҡшы таныш. Хәҙерге ваҡытта "илебеҙҙә наркомандарҙың артыуы туҡтап ҡалды" тигән белдереүҙәр ишетелһә лә, үлемесле ағыуҙы хатта 6 йәштән дә ҡулланыусыларҙың булыуы өмөттә һүндереп ҡуйғандай була.**

# АУЫРЫУ ТҮГЕЛ БЫЛ,

## ә ләззәт эҙләп абыныу…



Республикабыҙҙа 5444 - наркоман һәм 2736 наркотик ҡулланыусы теркәлгән. Әммә Башҡортостан наркоконтроль хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, ысынбарлыҡта наркотик ҡулланыусыларҙың һаны 80 меңгә етеүе ихтимал.

Һуңғы йылдарҙа мәктәптәрҙә, уҡыу йорттарында үткәрелгән наркотест та күп кенә наркомандарҙы асыҡларға ярҙам итә. Шул уҡ ваҡытта күп кенә ата-әсәләрҙең балаһын быньдай тикшереү үткәрергә ҡырҡа ҡаршы килеүе ғәжәпләндерә. Сөнки наркотик ҡулланған кешене тәүге мәлдән уҡ билдәләүе мөмкин түгел. Ул әле тулыһынса ағыуланып өлгөрмәгән, ата-әсәһенең ышанысын юғалтмаған, кеҫә аҡсаһы ла бар, һатып алынған шәхси әйберҙәренең бөрмәләп юҡҡа сығыуын да аңлата ала.

"Наркоманлыҡ - ауырыу" тип йәшәп килгән йәмғиәтебеҙ һуңғы осорҙа үҙенең уй-фекерен ҡырҡа үҙгәртте. Дин әһелдәренең: "Наркоманлыҡ сир түгел, ә әҙәм балаһының үҙенә яңы ләззәт эҙләп аҙашыуы, яңылышыуы ул", - тигән һүҙҙәре ысынбарлыҡҡа тура килә бит. Быны беҙҙең тормошобоҙҙа булған хәл-ваҡиғалар ҙа дәлилләй.

Бер егет 30 градуслыҡ һыуыҡта үҙенең 10 йәшлек ҡустыһының курткаһын систереп алып, сиғандарға наркотикка алыштыра. Һөҙөмтәлә, үпкәһенә ныҡ һалҡын алдырған малайҙы табиптар көскә ҡотҡарып ҡала. Теләгән ағыуын ҡулға төшөрөү өсөн наркоман бер ҙә үҙенең курткаһын тәҡдим итмәгән бит. Үҙенең йәне ҡәҙерле шул уға. Юҡҡа ғына психологтар наркомандарға эгоислыҡ, үҙен генә уйлау хас, тип әйтмәй, күрәһең.

20 йәшлек әсә бер доза наркотик өсөн өс айлыҡ балаһын сиғандарға "залогка" ҡалдыра. Әсәһе аҡса табып алып килгәнсе иламай торһон өсөн сиғандар балаға араҡы эсерә, ярай ҙа уны полиция хеҙмәткәрҙәре табып ала. Тыуғандан алып әсәһе тарафынан "залогка" бирелгән сабыйҙың сәләмәтлеге ни тиклем ҡаҡшауын күреп, табиптар ҙа аптырауға ҡала. Ошо ҡатынды "ул наркоман, ауырыу" тип йәлләп буламы? Юҡтыр. Ул бит бер ҙә үҙен һатмаған, ә көсһөҙ сабыйҙы шундай ыҙаларға дусар иткән, уны ғүмерлеккә ғәрип итеп ҡалдырған.

Эйе, наркомандар үҙҙәрен йәлләтеү өсөн ниҙәр генә уйлап тапмай! Иң таралғаны, "алтын укол" ҡаҙап үлеү менән янау. Йәнәһе, наркотиктың дозаһын арттырып эшләп үлеү. Ул йәһәттән бер әсәнең һөйләгәндәре һәр кемгә фәһем булырлыҡ: "Минең улым 12 йәштән наркотик ҡуллана башланы. Әлбиттә, тәүҙә мин был хаҡта белмәнем. Өйҙәге әйберҙәр юғала башлағас ҡына нимәләр һиҙенеп, ҡул тамырҙарын күрһәтеүен талап иттем. Унан һуң тамуҡ тормошо башланды. Нимә тип кенә алдамай ине ул! "Етте, ташлайым, табипҡа күренер өсөн 500 һум кәрәк", - тип аҡса алып сығып китә лә, күҙҙәре тоноп ҡайта. 17 йәшендә: "Мин һинә күп ҡайғы күрһәттем, башҡа улай йәшәй алмайым. Минә наркотикты артыҡ ебәреп үлергә кәрәк. Кайф аҫтында үлгәс, мин бер нәмә лә һиҙмәйәсәкмен. Һин дә иларһың-иларһың да тынысланырһың", - тине. Икәүләшеп ҡосаҡлашып иланыҡ. Унан мин был ғәмәлде атҡарыр өсөн күпме аҡса кәрәк булыуын һораным. Сөнки уның менән көрәшеп, йоҡоһоҙ төндәр, билдәһеҙлектән алйыр хәлгә еткәйнем, арығанайным. Улым минең менән мәңгелеккә хушлашып, 5 мең һум аҡса тотоп сығып китте. Наркотиктар һатып алып, уны көн һайын аҙлап ҡына ҡабул итеп, бер аҙна рәхәтлектә йәшәгәндән һуң, ҡайтып инде. Тағы алдауҙар, ышандырыуҙар. Һуңынан минә ҡул күтәрергә лә тартынмай башланы. Уны көскә аноним наркомандар йәмғиәтенә алып барыуға өлгәштем. Унда минең кеүек хәсрәткә, күҙ йәштәренә батҡан ата-әсәләр бик күп. Йәмғиәтте ойоштороусылар беҙҙең төп хатабыҙ - наркоман балаларыбыҙҙы йәлләү икәнлеген аңлатты. "Улар һеҙҙе бер ҡасан да йәлләмәйәсәк!" тигән һүҙҙәр ни тиклем хаҡ булыуын аңланым. Наркоманды йәлләргә, уға бушаҡлығыңды күрһәтергә ярамай, ҡаты һәм ваҡытты һуҙмай эш итергә кәрәк. Шуға күрә улым күпме генә өгөтләһә лә, мин уны кире алып ҡайтманым. Дауаланыуы уңышлы бара. Әгәр мин ваҡытты һуҙмай, улымды йәлләмәй, кешеләр ни әйтер, тип уйланмай, барыһын да белгәс тә ошо йәмғиәткә мөрәжәғәт иткән булһам, баламдың да, үҙемдең дә тормошом күпкә яҡшыраҡ юлдан тәгәрәр ине...".

Әҙәм балаһының үҙенең киләсәген балта менән өҙә сапҡан наркотиктарҙың ҡолона әүерелеүен бер нисек тә аҡлап булмайҙыр. Шул уҡ ваҡытта ошо ағыу менән көсеп итеп, сереп байығандарҙы ҡатыраҡ хөкөмгә тарттырһалар ине. Мәҫәлән, Ҡытайҙа наркотик һатҡан кешене генә түгел, ә уның бар туғандарын үлем язаһына хөкөм итәләр. Ни тиклем күп һанлы халыҡ үҙенең милләтен һаҡлай белә. Ә беҙҙең илдә наркотиктарҙан һәләк булған йәштәрҙең ҡәберлектәре арта ғына бара.

Эйе, киләсәгебеҙҙе наркотиктарҙан һаҡлап, һау-сәләмәт быуын үҫтереү - һәр кемебеҙҙең оло бурысы. Бының өсөн бала менән уртаҡ тел табыу, уның шөғөлдәрен белеү, ауыр саҡта ярҙамға килер дуҫына әүерелеү мөһим. "Кисәге наркоман булмай" тиһәләр ҙә, үлемесле ағыуҙан баш тартып, тулы тормош менән йәшәүселәр бихисап. Тик был оло ихтыяр көсөн, яҡындарыңдың таянысын тойоуҙы талап итә. Үҙегеҙҙең, балаларығыҙҙың, апай-ағайҙарығыҙҙың ғүмере, хатта иң ҡурҡыныс юл менән дә, тик наркотик табыуға ғына ҡоролмаһын өсөн, ошо минуттан уйланығыҙ, кешеләр!

Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



### Энергия

**2012 йыл һуңында ахырызаман түгел, ә планеталар парады көтөлә, ошо ваҡиға алдынан ергә тағы ла көслөрәк энергия киләсәк. Бынан башыңды ҡомға тығып, тирә-яҡта барған ошо процестарҙы ҡабул итергә теләмәү генә ҡотҡармаясаҡ. Мәле еткәс, шундай көслө энергия киләсәк, хатта төндә уяныып, тәнегеҙҙең ҡалтыранғанын тоясаҡһығыҙ. Урам буйлап китеп барасаҡһығыҙ, ә һеҙҙе ян-яҡҡа бәүелтәсәк.**

Әгәр быға тиклем түбән тирбәлеш, организмдағы тиҫтәләрсә йылдар туплаған шлактар менән дә йәшәп булһа, бөгөн, көслө энергияны ҡабул итеү алдынан, былай йәшәү мөмкин түгел. Таҙарынырға, таҙарынырға һәм таҙарынырға кәрәк! Тәнебеҙ саф булырға тейеш! Ер ҙә, тағы ла юғарыраҡ энергияға күсергә әҙерләнеп, интенсив рәүештә таҙарына. Һыу - шул уҡ таҙарыныу, ут - шул уҡ таҙарыныу!

Йыһандан ебәрелгән юғары энергия һөҙөмтәһендә беҙ аҙыраҡ ашай башлайбыҙ. Берәй заман беҙгә иртән 1 шафталы (персик), төш мәлендә бер алма, кисен 3-5 финик емеше ашау ҙа етәсәк. Ә артабан инде бөтөнләй ашауҙан баш тартырға мөмкин. Заманы шундай, беҙ яҡтылыҡ тәненә эйә булырға (Ғайса бәйғәмбәр, Елена һәм Николай Рерих һ.б. эйә булған тәнгә) тейешбеҙ. Елена Рерих үҙе яҡтылыҡ тәненә күскәс, бөтөн тәне янған кеүек хис кисереүе тураһында яҙа (организм барлыҡ шлактарҙан, токсиндарҙан, кире энергиянан арына). Яҡтылыҡ тәненә эйә кеше предметтар аша үтә, һыу өҫтөнән батмай йөрөй ала. Николай Рерихҡа дуҫы килеп, китап һорап торғас, ул онотолоп, китапханаға стена аша сыға, әлбиттә, кире ингәндә ишектән килеп инә.

Хәҙер барлыҡ процестар бик тиҙ бара - ваҡыт тығыҙлана. Шуға ла тап хәҙер бөтөн тирә-яҡ мөхит менән гармонияла булырға кәрәк. Үҙ һүҙеңдең көсөн, үҙеңдең хәҡиҡәтеңде талап итергә кәрәк! Элек кешеләр йөҙҙәрсә йылдар йәшәгән (Маусафил 900 йылдан ашыу йәшәгән) һәм был ғына сик түгел! Беҙ шундай уҡ мөмкинлектәргә кире ҡайтабыҙ. Ләкин тағы ла юғарыраҡ, сифатлыраҡ кимәлгә. Ул саҡта кешенең тән биологияһы үҙгәрәсәк. Әле үк яңы биологиялы балалар тыуа, уларҙың ҡан составы һәм ДНК-һы беҙҙекенән айырыла. Уларҙың сәләмәтлеге ныҡ, һәләтлеләр. Яңы биологияға аңлы рәүештә күскән өлкәндәрҙең әлегәсә "йоҡлап" ятҡан ДНК спиралдәре уяна һәм 50 йәшлек булғанда ла уларҙың биологик йәше 20 һәм унан да йәш булыуы мөмкин! Хәҙер һәр кемдең үҙ тирбәлешен күтәреү, яңы биологияға эйә булыу, Аллаһы Тәғәләгә, яҡтыға, мөхәббәткә, мәңгелек йәшлеккә ҡайтыу мөмкинлеге бар! Хәҙер - мөғжизәләр заманы!

### Айырым кәңәштәр

1. Көн һайын иртән күкрәк уртаһында бәләкәй генә ҡояшты күҙ алдына килтереп, уны мөхәббәт менән тултырығыҙ, уның барлығын тойоғоҙ һәм Аллаһы Тәғәләгә, һәр күҙәнәгегеҙгә, аурағыҙға мөхәббәт һәм рәхмәт ебәрегеҙ.

2. Ер-Әсәгә, ерҙең үҙәгенә, Ҡояшҡа нур оҙатығыҙ һәм унан үҙегеҙгә илаһи гармония һәм камиллыҡ биреүен һорағыҙ!

3. Үҙегеҙ туҡланған аҙыҡҡа һәм һыуға мөхәббәт ебәрегеҙ, уларҙы дауалаусы итегеҙ.

4. Үҙегеҙгә кәрәк мәсьәләне хәл итеү кемгә бәйле, шуларҙың барыһына ла мөхәббәт ебәрегеҙ, барлыҡ бинаны мөхәббәт менән яҡтыртығыҙ!

5. Һәр саҡ арҡағыҙҙы тура тотоғоҙ - күкрәгегеҙҙе тимусҡа (вилочковая биҙе) өҫтән энергия төшөрлөк итеп алға сығарығыҙ (тимус йәшәреү өсөн яуап бирә).

6. Даими рәүештә мунсаға йөрөгөҙ - тир аша шлактар сыға! Йыуынғандан һуң һыуыҡ һыу менән ҡойоноғоҙ - организм туплана, тирбәлеш күтәрелә!

7. Душ ингәндә өҫтән дауалаусы көмөш ағым аға тип күҙ алдына килтерегеҙ, шулай итеп барлыҡ бысраҡ энергия ер үҙәгенә, эшкәртелеүгә китә.

8. Инфекция таралғанда иртән ас ҡарынға бер балғалаҡ аҡ балсыҡ, ә кискеһен бер ҡалаҡ балды ваҡланған һарымһаҡ менән ашағыҙ.

9. Тамағығыҙ ауырта башлаһа, муйыныгыҙҙа (елкә соҡороноң өҫкө өлөшө) әүҙем нөктәне табып, уны көнөнә бер нисә тапҡыр массажлағыҙ (әгәр нөктәне дөрөҫ тапһағыҙ, ауыртыу аңҡау биҙенә биреләсәк).

10. Йоҡлар алдынан Аллаһы Тәғәләнән, фәрештәләрегеҙҙән һәм остаздарығыҙҙан һеҙҙе дауалауҙарын, организмығыҙҙы йәшәртеүҙәрен, 12 епле ДНК-ғыҙҙың барлыҡ яҡтылыҡ кодтарын әүҙемләштереүҙәрен һорағыҙ һәм уларға алдан уҡ рәхмәт һүҙҙәрен еткерегеҙ!

11. Һәр саҡ бөтөнлөк һаҡлағыҙ (төшөнкөлөккә бирелмәгеҙ, икегә бүленмәгеҙ).

12. Һеҙҙе нимәлер сығырығыҙҙан сығара икән (хафаландыра, йәнегеҙҙе көйҙөрә), "Мин ысынбарлыҡтағы аңлы, аңһыҙ, аҫҡы аң кимәлендә, шулай уҡ беҙҙең ижад үлсәмдәрендә булған барлыҡ ҡапма-ҡаршылыҡтар менән бер тигеҙлектә һәм берлектә торам!" тип ҡабатлағыҙ.

13. Иҫегеҙҙән сығармағыҙ: барлыҡ ваҡиғалар ике категорияға бүленә: яҡшы һәм файҙалы!

14. Ямғыр мәңге яумай, ямғырҙан һуң мотлаҡ ҡояш сыға - һәр ваҡыт йылмайығыҙ! Һеҙ йылмайһағыҙ, барлыҡ ағзаларығыҙ һәм күҙәнәктәрегеҙ, бөтөн донъя йылмая!

**Рауфан МОРТАЗИН.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Ыңғай маҡсаттар кәрәк

**3-сө этап: Матди һәм күңел асыу маҡсаттары.** Был этапта берҙән-бер сикләү - үҙегеҙ һайлаған йәки хыялығыҙҙа тыуҙырған сикләүҙәр. Хыялығыҙға "аҡылдан яҙырға" мөмкинлек бирегеҙ. Ҡағыҙға төшөрөлгән маҡсаттар аңығыҙҙа ныҡлы урын ала һәм уға өлгәшеү өсөн ниндәйҙер эшмәкәрлек алып барғанда тормошҡа аша.

Тәбиғәт ҡанунының нисек эшләүенә анализ яһау кәрәкмәй. Әйҙәгеҙ, киң масштаблы фекер йөрөтәйек һәм шунан ҡәнәғәтлек алайыҡ. Үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған барлыҡ матди ҡиммәттәрҙе билдәләгеҙ (фантазияғыҙға ирек бирегеҙ, аныҡ һәм теүәл булығыҙ). Иң мөһиме - хыялығыҙҙы тиҙ генә яҙып сығығыҙ, уларҙың шул тиклем ҙур икәнлеген уйлап торорға ваҡытығыҙ ҡалмаһын. Бер генә хыял да артыҡ ҙур булмай. Хәйерселәр ҙә бер йыл эсендә миллионер булып китә. Бермудта йорт алғығыҙ киләме? Яңы БМВ, яхта һатып алғығыҙ йәки донъя буйлап сәйәхәт иткегеҙ киләме? Ә бәлки, бай һәм тулы ҡанлы тормош менән йәшәгегеҙ киләлер? Быларҙың барыһын да тиҙ генә ҡағыҙҙа яҙып, уларға өлгәшеү ваҡытын билдәләгеҙ һәм бер минут та көтөп тормайынса, маҡсатығыҙға табан атлай башлағыҙ!

**Был йылға 10 төп матди һәм һәм күңел асыу маҡсаттарынан исемлек төҙөгөҙ.** Был исемлекте 10 пунктҡа тиклем етерегеҙ. Шулай уҡ алдағы биш, 10 йылға ла төп маҡсаттарығыҙҙы билдәләгеҙ.

Маҡсаттар - тормош камиллығының һәм оҙайлы ҡаҙаныштарҙың ҡаны һәм тормош һуты. Маҡсаттарығыҙҙы һәм бурыстарығыҙҙы ҡағыҙға аныҡ итеп яҙып, уларҙы тормошҡа ашырыу өҫтөндә эшләйәсәк айырым көстәрҙе уйынға йәлеп итәһегеҙ. Быға тиклем ябай кешенең көнөнә уртаса 60 мең уй уйлауын асыҡлағайнығыҙ. Маҡсаттарығыҙҙы ҡағыҙға яҙып, мейегеҙгә был маҡсаттың ҡалған 59 999-ға ҡарағанда мөһимерәк икәнлеген белдереп, йәшел юл асаһығыҙ.

**Алдағы 10 йылға төп финанс маҡсаты исемлеген төҙөгөҙ.** Һеҙ әле генә үҙегеҙҙе илһам, дәрт һәм теләк менән тултырған маҡсаттар ҡуйҙығыҙ. Хәҙер инде алдығыҙҙа аныҡ картина тора. Күпселек кеше был тормошта аныҡ маҡсатһыҙ һәм идеяһыҙ ҡамғаҡ кеүек тәгәрәй. Беҙ әле генә шул ҡаршылыҡты үттек. Тағы нимә мөһим: ошо маҡсаттарҙы даими күҙ алдында тоторға кәрәк. Бөгөн улар ни тиклем алыҫ булып күренһәләр ҙә, уларға һүнергә ирек бирмәгеҙ. Маҡсаттарығыҙға ышанығыҙ, йондоҙҙарға ынтылығыҙ, үҙегеҙҙеке икәненә инанған тормошҡа эйә булығыҙ. Был йәһәттән Торо бына нимә тигән: "Әгәр хыялығыҙ артынан эйәрһәгеҙ һәм хыялығыҙҙағы тормош менән йәшәргә тырышһағыҙ, мотлаҡ төшөгөҙгә лә инмәгән уңышҡа өлгәшерһегеҙ".

**Робин ШАРМА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# СӘС АЛЫУСЫ ҺӨНӘРЕ ЮҠМЫ?

Бер кеше сәсен тәртипкә килтерер өсөн, ғәҙәттәгесә, бөҙрәханаға килә. Хеҙмәтләндереүсе оҫта менән донъя хәлдәре, тормош хаҡында әңгәмә ҡорғанда Аллаһы Тәғәлә тураһында һүҙ сыға. Сәс алыусы: "Нимә тиһәгеҙ ҙә, мин Хоҙайҙың барлығына ышанмайым",- ти. "Ни өсөн?" тип һорай әңгәмәсеһе. "Аллаһ юҡ икәненә төшөнөр өсөн урамға сығып ҡарау ҙа етә бит. Бына, әйтегеҙ, Хоҙай бар икән, ни өсөн ауырыуҙар, етем, ҡарауһыҙ ҡалған балалар шул тиклем күп? Хоҙай ысынлап та булһа, донъяла бер ниндәй бәлә лә, ҡайғы ла тыумаҫ ине", - ти оҫта. Сәс алдырырға килгән кеше бәхәсләшмәҫ өсөн һүҙҙе дауам итмәҫкә була. Оҫта эшен бөткәс, ул сығып китә. Һәм ҡапыл урамда сәсе еткән, ҡырынмаған, әрһеҙ бер кешене күреп ҡала. Әйтерһең, ул әҙәм ғүмерҙә лә көҙгөгә ҡарамаған. Шул ваҡытта кеше бөҙрәханаға кире инә лә, оҫтаға былай ти: "Беләһегеҙме мин ни уйланым? Донъяла сәс алыусы тигән һөнәр юҡ икән ул..." "Нисек инде улай, - тип ғәжәпләнә оҫта. - Ә мин сәс алыусы түгелме ни?" "Сәс алыусы һөнәре булһа, урамда анау кеше кеүек ҡырынмаған, сәсен алдырмай йөрөгән әҙәмдәр булмаҫ ине". "Бында оҫтаның бер ғәйебе лә юҡ. Ундайҙар үҙҙәре миңә килмәй бит". "Ана шул шул, - тип һүҙен ҡеүәтләй әңгәмәсеһе. - Мин дә шуны әйтергә теләйем: Хоҙай бар. Тик кешеләр үҙҙәре Уға килмәй. Бына ни өсөн донъяла бәлә-ҡазалар шул тиклем күп..."

# БӘХӘС СИСЕЛЕШЕ

Бер ваҡыт Әбү Хәнифәне (радиаллаху анху) Хоҙайға ышанмаусылар бәхәскә саҡыра. Имам билдәләнгән сәғәткә килергә ризалаша. Әммә осрашыуға ул һуңлап ҡына килә. Әбү Хәнифә ғәфү үтенеп, һуңлап килеүенең сәбәбен былай аңлата: "Һеҙгә килгән ваҡытта миңә күпер аша үтергә тура килде. Ҡапыл ярҙа ятҡан әйберҙәргә (ҡапсыҡ, тоҡсайҙарға) иғтибар иттем. Улар үҙҙәренән-үҙҙәре яр буйындағы кәмәгә һалынды. Кәмә үҙе йөҙөп икенсе ярға килеп терәлде. Һәм әйберҙәр йәнә үҙҙәре кәмәнән бушатылды". Имамды тыңлап тороусылар башта бик ғәжәпләнә һәм һуңынан, бындай хәлдең булыуы мөмкин түгел, тиҙәр. Һәм Әбү Хәнифә уларға былай ти: "Улай булғас, нисек һеҙ донъя үҙенән-үҙе барлыҡҡа килде, тип әйтә алаһығыҙ?.."





## 2 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 «Доброе утро»
09.00 Новости
09.05 «Контрольная закупка»
09.40 «Женский журнал»
